ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 апрель (алағарай) 2021

№ 17 (955)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Маҡсатҡа өлгәшеү өсөн...**

**аҙымлап алға барыу ҙа етә**



4

**Ағас ултыртылды, йортҡа нигеҙ һалынды...**



8-9

**Бына шундай балалар уҡый**

**20-се Башҡорт ҡала гимназияһында**



10

**Боронғо Атайсалдың**

**бөгөнгө заңы**



12-13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? 1 апрелдән 3-тән 7 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләр арттырылған пособиеға дәғүә итә. Ошондай сараларҙың балалы ғаиләләргә ниндәй кимәлдә ярҙамы тейә?

***Ләйсән МӘХМҮТОВА, Мәләүез ҡалаһы:*** Мин - һигеҙ балалы әсәй. Шуға күрә балалы ғаиләләргә ҡағылышлы һәр яңылыҡты өйрәнеп, танышып барам. Пособие күләме артыуы хаҡында мәғлүмәт мине ҡыуандырҙы. Ғөмүмән, республикала демографияны үҫтереүгә йүнәлтелгән байтаҡ программа буйынса ашырыла һәм уларҙа ҡатнашыу хоҡуғын ҡулланғаным бар. Әсәлек сертификаты, бушлай ер участкаһы... Социаль ярҙам саралары камиллашыуын дауам итә. Бер ҡарарҙың көсө сыҡһа, икенсеһе ҡабул ителә, барыбер бер урында тормай. Балалы ғаиләләргә ярҙам итеү маҡсатында төрлө йүнәлештәр барлыҡҡа килеп тора.

Әйткәндәй, беҙҙең илдә социаль ярҙамдың төрө бик күп. Шуның бер өлөшө аҙ килемле ғаиләләр өсөн. "Путин пособиеһы" - шуның береһе. Балалы ғаиләләргә был ярҙам сараһы артабан да күрһәтелһә, икенсе-өсөнсө, дүртенсе һәм артабанғы балаһын табырға теләгәндәр бер нисә йылдан, һис шикһеҙ, артыр, тип уйлайым. Ыңғай тенденция әле үк һиҙелә. Мәҫәлән, былтыр икенсе, өсөнсө һәм артабанғы тыуған балалар һаны артыуы билдәле. Быға тиклем күп ғаилә бер бала менән сикләнһә, Әсәлек капиталы бирелә башлағас та икенсе, өсөнсө балаһын тапҡан ғаиләләр күбәйгәйне бит. Хәҙер ҙә шулай булыр, тип уйлайым.

Балаларға пособиелар быға тиклем дә бирелде. Әле уны алыу шарттары ғына үҙгәрҙе. Белешмәләр, документтар йыйыу, уларҙың артынан йөрөү, әлбиттә, бик еңел түгел. Балаларҙы ҡалдырып, сират көтөргә лә тура килә. Минә үҙемә, мәҫәлән, күп функциялы үҙәктә оҙаҡ ҡына ултырырға тура килде. Әммә йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә, тиҙәр. Йөрөмәһәң, булмай инде. Аллабирһә, артабан да был пособиены алырмын, тип уйлайым.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КӘҢӘШТӘРЕНӘ...

## ...ҡолаҡ һалам



**"Киске Өфө" гәзитен иң һуңғы битенән башлап уҡырға яратам. Төрлө быуаттарҙа йәшәгән аҡыл эйәләренең фекерҙәре, афоризмдары, башҡорт халҡының мәҡәл-әйтемдәре бик мәғәнәле. Төрлө халыҡтың көнитмешен яҡтыртҡан риүәйәттәр ҙә фәһемле. Кешелек тормошондағы иң кәрәкле ҡиммәттәр ым-ишара менән генә бирелә. Ҡыҫҡа ғына, әммә бик кәрәкле һәм урынлы ундағы материалдар.**

Яңы, быға тиклем бер ҡайҙа ла баҫылмаған хикәйәләргә лә урын күп бирелә. Шуныһы оҡшай. Гәзиттең теле матур, бай, төрлө диалект һүҙҙәр ҡулланылыуы был баҫмала автор материалдарына урын ҙур бирелеүе тураһында һөйләй. Бер ҡалыпҡа һалмай, рәсмиләштермәй генә урынлаштырыла улар. Шуныһы менән дә баҫма бик ҡыҙыҡлы һәм уҡымлы, тип уйлайым.

Башҡорт халыҡ тарихы, теле, мәҙәниәте, мәғарифы хаҡында ошо өлкәләрҙә эшләп йөрөгән йәки элек эшләгән зыялылар, компетентлы кешеләр менән ҡоролған әңгәмәләр ҙә мауыҡтырғыс. Һаулыҡ бите лә бик уңышлы төҙөлә. Белгестәр менән әңгәмәләр, осрашыуҙар ойоштороло. Ғөмүмән, "Киске Өфө" кешенең физик һәм рухи сәләмәтлеген нығытыуға йүнәлтелгән материалдарҙы күп баҫа. Дауалауҙың халыҡ ысулдары, доғаларҙың, ғибәҙәттәрҙең ярҙамы, көсө тураһында мәҡәләләрҙе яратып уҡыйым.

Минә 77 йәш. Яңыраҡ гәзиттә һыуҙың организм өсөн ниндәй ҙур роль уйнауы хаҡында уҡыным. Шул кәңәшкә эйәреп, һыу эсә башланым. Тәүҙә һыуҙы көсләп кенә эсеп ҡуйһам, хәҙер иһә өйрәндем, иртән бер сынаяҡ йылы һыуҙы еңел генә эсеп ҡуям. Егерме минут тирәһенән генә ғәҙәттәгесә сәй эсәм. Иртәнге, төшкө, киске аш араһында бер, ҡайһы берҙә хатта икешәр сынаяҡ һыу эсәм. Ҡайһы саҡта аҙ ғына бал да ҡутайым. Үҙемдә ыңғай үҙгәреш һиҙәм, нисектер, еңел булып ҡалды. Бына шулай. Гәзиттә сыҡҡан файҙалы кәңәштәрҙе уҡып ҡына ҡалмайым, көндәлек тормошта ла ҡулланырға тырышам.

**Разия СӘЛИХОВА.**
**Күгәрсен районы.**

12+

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# ҠУНАҠҺЫҘ ЙОРТҠА...

## фәрештә инмәй

Кеше яратмаған танышым бар минең. Яратмау ғына түгел, бөтә уңышһыҙлыҡтарында, бәхетһеҙлегендә ғәйепләй ул эргә-тирәһендәгеләрҙе. Шул сәбәпле туғандары менән дә яҡынлығы юҡ. Күҙ тейгеҙә, боҙом эшләй, тип, күршетирәһе менән дә аралашмай. Эш урынында ла шикләнә, ҡурҡа, барыһы ла уға аяҡ салған, уға тейешле аҡсаны башҡалар алған кеүек тоя. Һәр ваҡыт шик-шөбһә менән йәшәп, ҡайһы берҙә, ысын мәғәнәһендә, депрессияға бирелә. Шул ваҡыттарында уны үҙемә саҡырам. Бергәләп һөйләшеп, сәй эсеп, күңеле күтәрелеп ҡайтып китә.

Яңыраҡ шылтырата. "Һин өйҙәме? Ҡоймаҡ ҡойҙом да, һиңә сәй эсергә барырға ине", - ти был. Ә мин тап ул йәшәгән йорт янында магазин буйлап йөрөйөм. "Сәйенде ҡуй һуң, хәҙер инәм", - тием. Танышым ҡырҡа баш тартты: "Беләһең дә инде - мин береһен дә өйөмә саҡырмайым. Ҡунаҡсыл түгелмен", - тине.

Шул ваҡытта ғына ошо бөхтә генә йәшәгән, эсеп-тартып, аҙып-туҙып йөрөмәгән танышымдың, ысынлап та, үҙенең шәхси тормошон ете йоҙаҡ артында тотоуына иғтибар иттем. Был нимә - депрессияның бер төрөмө? Әллә, үҙе әйтмешләй, ҡунаҡсылһыҙлыҡ ҡынамы?

Шулай ҙа ай-вайына ҡуймай, сәйгә тәм-том алып, фатирының шылтырағына бәҫтым. Ҡыуып сығарманы, әлбиттә. Әйткәндәй, танышлығыбыҙ күптән булһа ла, өйөндә беренсе тапҡырмын. Ингәс тә, китап кәштәһендә "Төрлө халыҡтарҙың риүәйәттәре" исемле йоҡа ғына тышлы йыйынтыҡ күҙгә салынды. Танышым сәйен шыжлатҡансы, ошо риүәйәтте табып уҡып иштергәҙем уға: "Бер ҡатын Мөхәммәт (с.ғ.с) бәйғәмбәргә иренең өйөнә йыш һәм күп ҡунаҡ алып ҡайтыуына зарланған. Аллаһ илсеһе бер нәмә лә әйтмәгән, әммә бер аҙҙан уларға ҡунаҡҡа барасағын иҫкәрткән. Ҡатын да, ир ҙә бик ҡыуанған. Мул табын әҙерләп, бик йылы ҡаршы алғандар. Бәйғәмбәр бер аҙ ултырған да, хужаларҙың ҡунаҡсыллыҡтары өсөн рәхмәт әйтеп, ҡайтырға булған. Сыҡҡан ваҡытта хужабикәгә: "Минең артымса ишек тупһаһына иғтибар ит", - тигән. Ҡатын шулай эшләгән һәм саҡ һуштан яҙмаған: Бәйғәмбәрҙең артынан ҡуңыҙҙар, тараҡандар, ҡорттар һәм башҡа береһенән-береһе ҡурҡыныс һәм имәнес нәмәләр сыҡҡанын күргән. Шул ваҡыт Бәйғәмбәр артына әйләнгән дә:

- Бына шулай... Килгән һәр ҡунаҡ артынан бөтә насар нәмә китә. Шуға күрә, йортоғоҙға ингән һәр кешене яҡшы итеп ҡаршы алырға, хөрмәт күрһәтергә кәрәк. Аллаһы Тәғәлә ҡунаҡсыл йортто һәм уларҙың хужаларын ярата, - тигән".

Танышым ниндәй һығымта яһағандыр, артабан һүҙҙе дауам итмәнек...

**Лена БАРЫЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***1 апрелдән 3-тән 7 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләр арттырылған пособиеға дәғүә итә. Ошондай сараларҙың балалы ғаиләләргә ниндәй кимәлдә ярҙамы тейә?***

***Әмир ХӘЛИТОВ, хеҙмәт ветераны, Күйөргәҙе районы:*** Үҙәк телевидениеның ҡайһы каналын ғына асма, бына бер йылдан ашыу ирҙән дә, кисен дә, коронавирус сире тураһында күрһәтәләр. Бала табыуҙы арттырыу темаһы унан саҡ ҡына ҡалышалыр, моғайын. Бөтә ер йөҙөн тетрәткән дәһшәтле һуғыш йылдарында һәм унан һуң да бала табыу проблемаһы бөгөнгөләй, бөйөк Енеүгә 76 йыл тулғас та, былай ҡиҫкен тормағандыр. Беҙ үҫкән саҡта һәр йорт һайын алты-ете бала була торғайны. Атай-әсәйҙәребеҙ әллә ни хәлле лә йәшәмәне.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланған осорҙа бала-саға бигүк булмаған, сөнки ират йә яу яланында һәләк булған, йә һуғыштан ике-өс йылдан һуң ғына ҡайтҡан. Илебеҙ әллә ни ныҡлап аяҡҡа баҫып өлгөрмөй, йәш һәм ҙур тәжрибәле ғаиләләр "өҫтән" күрһәтмә көтмәй демографик хәлде ыңғай хәл итергә тотона. Бала табыу йәшендәге меңәрләгән ҡатындың нәҫелен арттырырға теләге булыуына иманым камил. Шуға ла тол ҡатындар буйынса Совет власының айырым ҡарары ла булғандыр, моғайын, сөнки ауыл һайын 1952-1954 йылғы атайһыҙ малай-ҡыҙҙар бөрөү генә түгел.

Хәҙер бала тапһын өсөн йөҙәрләгән мең һум түләйҙәр. Ҡайһы берәүҙәр аҡса кәрәк булғанға ғына ла бала таба. Бер илле йыл элек "Сифат билдәһе" тигән тәшөнсә, тамға була торғайны. Аҡса өсөн тыуған балаһағаға ниндәй сифат билдәһе ҡуйырҙар ине икән?

Киң мәғлүмәт сараларында, интернетта көн дә тиерлек ете йәшкә тиклем балаға ай һайын ҙур ғына сумма аҡса түләнеүе хаҡында һөйләйҙәр. Ә беҙҙең атай-әсәйҙәр тик бишенсе балаһына ғына алды пособиены, тик бынан бер кем дә зарланманы, аҡса ҡәҙерен, тормош ҡәҙерен белеп йәшәне.

Легендар "Свинарка и пастух" кинофильмында төп ролде башҡарған, 102 йәшкә тиклем йәшәгән билдәле актер Владимир Зельдин бына нимә ти: "Беҙгә, беҙҙең балаларыбыҙ яҡшы йәшәйәсәк, тинеләр. Ә хәҙер балаларға, һеҙҙең атай-әсәйҙәрегеҙ һәйбәт йәшәне, тиҙәр". Бына ошо фекерҙең һуңғы өлөшө хәҙерге быуынға өлкәндәрҙән ҡалышмай донъя көтөргә мәжбүр итәләр - аҡсаға булһа ла, бала табырға, эшләмәһә лә дәүләттән финанс ярҙамы алырға. Быларҙан ҡотолоуҙың тик бер генә юлы барҙыр - етерлек кимәлдә тейешле эш хаҡы булған эш урындары булдырыу. Үҙең эшләп алған аҡсаның ҡәҙере күпкә юғарыраҡ. Шул сағында кеше иртәгәһе көнгә ышанып, балалар күберәк тыуыр ине...

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

# МАҠСАТҠА ӨЛГӘШЕҮ ӨСӨН...

## аҙымлап алға барыу ҙа етә



**Гәзитебеҙҙең был һанын сығарғанда Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Сығышының башында уҡ Владимир Владимирович төп темалар булып илдең эске, аныҡлап әйткәндә, һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт, иҡтисади һәм шулай уҡ тышҡы мөнәсәбәттәр, именлек мәсьәләләре торасағын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Мөрәжәғәтнамәлә "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһындағы әлеге сығыштарҙа күтәрелгән проблемалар буйынса ошондай юлдар ҙа бар һәм уларҙы уҡыусыларыбыҙ иғтибарына айырым тәҡдим итәбеҙ:**

- Быйыл йәйге лагерҙарҙа балалар путевкаһының яртыһы хаҡын ғына түләп ял итәсәк.
- Өс йәшкә тиклем беренсе һәм икенсе балаға түләүҙәрҙе (5650 һумдан 11 300 һумға тиклем) һәр ғаилә ағзаһына килем күләме ике йәшәү минимумы күләменән кәм булған ғаиләләр ала. Уның күләме һәр балаға 11300 һум тәшкил итә. Федерацияның 78 субъекты өсөнсө балаға ла шундай уҡ күләмдәге түләүҙәрҙе индергән дә инде.
- Балаларын яңғыҙ тәрбиәләгән әсәйҙәр һәм атайҙарға айырым ярҙам күрһәтеү өсөн 1 июлдән шундай ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән 8-16 йәшлек балаларға 5650 һум түләү индерелә.
- Йөклөлөктөң иртә мөҙҙәтендә иҫәпкә торған һәм ауыр матди хәлторошта булған ҡатын-ҡыҙҙарға ай һайын 6350 һум түләү индереү мәсьәләһе ҡарала.
- Быйылдан башлап 7 йәшкә тиклемге бала ауырып, ата-әсәһе эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы алған осраҡта, уларға түләү эш хаҡының 100 процентынан сығып билдәләү тураһында закон ҡабул ителеүе ихтимал.
- Әсәлек капиталын түләү программаһы 2026 йылға тиклем оҙайтыла. Ул беренсе бала тыуғанда уҡ бирелә. Индексацияланғандан һуң уның күләме 640 мең һум тәшкил итә.
- Мәктәп йәшендәге балалары булған ғаиләгә августа һәр балаға 10-ар мең һум бер тапҡыр ярҙам бирелә. Был категорияға беренсе синыфҡа барыусы балалар ҙа инә.
- 2024 йыл һуңына тиклем илдә тағы ла 1300 яңы мәктәп төҙөләсәк, унда миллиондан ашыу бала белем аласаҡ. Бынан тыш, 4 йыл эсендә 16 мең мәктәп автобусы алынасаҡ.

**(Мөрәжәғәтнамәнең дауамын 4-се биттә уҡығыҙ).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓23 апрель мәғлүмәттәренә ярашлы Башҡортостанда COVID-19 диагнозы раҫланған бөтәһе 430 кеше вафат булған. Пандемия башланғандан алып 34 691 кеше (бер тәүлектә +99) яңы коронавирус инфекцияһына ыңғай тест тапшырған. Әлеге ваҡытта 2 330 кеше әүҙем сир йөрөтөүсе булып тора.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. Документтың яңы редакцияһына ярашлы, Башҡортостанға сит дәүләттәрҙән, шул иҫәптән Рәсәйҙең башҡа төбәктәре аша транзит менән килгәндәр лабораторияла ПЦР алымы менән ковидка тикшереү һөҙөмтәләре әҙер булғансы мотлаҡ изоляция тәртибен үтәргә тейеш.

✓Быйылдан башлап Башҡортостанда йыл һайын АРТ-Ҡоролтай мәҙәни форумы ойоштороласаҡ. 2021 йылда Ҡоролтай 14 майҙа була. Маҡсаты - 2030 йылға тиклемге осорҙа Дәүләт мәҙәни сәйәсәте стратегияһын ғәмәлгә ашырыуҙың һөҙөмтәлелеген арттырыу. Ойоштороу комитетын Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов етәкләй, ойоштороу комитеты рәйесе урынбаҫары - Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова.

✓Башҡортостанда республика Башлығы ҡарамағындағы Геопарктар буйынса попечителлек советы булдырылды. Эшмәкәрлектең маҡсаты - геопарктарҙы үҫтереү тәҡдимдәрен әҙерләү буйынса урындағы үҙидара органдары, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт власы органдары һәм ижтимағи, фәнни, эшлекле даирә вәкилдәренең үҙ-ара эш итеүе. Попечителлек советының етәксеһе - Башҡортостан Республикаһы Башлығы, рәйес урынбаҫары - Хөкүмәт премьер-министры Андрей Назаров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2021 йылдың мартында Рәсәй төбәктәре башлыҡтары рейтингында дүртенсе урынды алды. Ул медиарейтингта Волга буйы федераль округындағы бөтә коллегаларын уҙып китте. Дөйөм рейтингта беренсе урында - Мәскәү мэры Сергей Собянин, икенселә - Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев. Өсөнсө урын Санкт-Петербург губернаторы Александр Бегловта.

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ЭШСЕ СИНЫФ, ҺИН ҠАЙҘА?

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков журналистарҙың йәмғиәттә мигранттарға ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереүҙәр буйынса тикшеренеү мәғлүмәттәренә ҡағылышлы һорауҙарына яуап бирҙе.**

"Быдай тикшеренеү материалдары менән таныш түгелмен, шуға күрә был хаҡта аңлатма бирә алмайым", тине ул. Шул уҡ ваҡытта матбуғат секретары һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә мигранттар һанының кәмеүенә бәйле үкенес белдерҙе: "Амбициоз пландарҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн беҙгә был мигранттар бик һәм бик тә кәрәк, - тип белдерҙе Д.Песков .- Улар пандемия арҡаһында кәмене. Был эшсе көстәр беҙгә ауыл хужалығы өлкәһендә лә бик кәрәк".

Бына нисек! Рәсәйҙә "амбициоз план"дарҙы ғәмәлгә ашырыу, йәғни ҙур һәм мөһим төҙөлөштәр яҙмышы ҡасандан бирле мигранттар көнлө булып ҡалды әле? Ә Рәсәйҙен үҙенең эшсе көстәре бындай мөһим төҙөлөштәр һәм ауыл хужалығын үҫтерееү өсөн кәрәкмәй булып сығамы инде? Әллә был һүҙҙәр үҙебеҙҙең эшсе синыф вәкилдәренең сәменә тейер өсөн генә әйтелдеме? Нисек булһа ла, Песков әфәнденең быңдай белдереүе йәмәғәтселектә төрлө һәм нигеҙҙә асыулы фекерҙәр тыуҙырмай ҡалманы, әлбиттә. "Лайыҡлы эш хаҡы түләгеҙ - беҙ ҙә эшләй беләбеҙ", "Мәшғүллек үҙәге тулы халыҡ, беҙгә мигранттар кәрәкмәй", "Әйтерһең, үҙебеҙҙә эшсе көстәр юҡ", "Үҙебеҙҙекеләргә түләгәнсе, мигранттарҙы арзанға яллау отошло властарға" - бына ошондай ярһыу ҙа, әрнеүле лә һәм тағы ла уҫалыраҡ комментарийҙар яуҙы социаль селтәрҙәрҙә Д. Песковтың был хәбәре айҡанлы. Р. Даянов тигән бер автор, мәҫәлән, ошолай тип яҙа: "Беҙгә лайыҡлы эш хаҡы кәрәк. ПТУ-ларҙы ябыһан асып, төҙөлөш һөнәрмәндәре әҙерләгеҙ, колхоз-совхоздарҙы кире тергеҙегеҙ. Кешеләргә үҙ ерҙәрендә киҙәнеп эшләргә ирек бирегеҙ. Эш кешеһенә аяҡ салыусы, кәрәкмәгән закондарҙы, ауыр һалымдарҙы бөтөрөгеҙ. Шул саҡ кеше тубыҡланған хәленән тороп баҫыр, эшкә тотонор. Мигранттарҙың да кәрәге ҡалмаҫ".

Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа рәсәйҙәрҙең мигранттарға ҡарата мөнәсәбәте үҙгәреүе бер кемгә лә сер түгел.



Юғары власть вәкиле Д. Песковтың был хаҡтағы тикшеренеүҙәр мәғлүмәттәре менән таныш булмауы аптырата, әлбиттә. Ә бына Рәсәй Президенты хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Магомедсәләм Магомедов был мәғлүмәттәр хаҡында бик яҡшы белә, ахры. Уның һүҙҙәре буйынса, былтыр ғына ла мигранттарға кире ҡарашлы рәсәйҙәр һаны 7,5 процентҡа артҡан. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан һәр дүртенсе респондент ситтән килеүселәргә кире ҡараште булып сыҡҡан. Был илдә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙә көсөргәнеш тыуҙыра, ти Магомедов. Ләкин бындай хәлдең тыуыуында күп йәһәттән мигранттар үҙҙәре сәбәпсе булып тороуы хаҡында берәү ҙә өндәшмәй. Сит ҡорамға үҙ уставың менән йөрөмә, тигән хәкикәтте улар таныырға ла теләмәй. Үҙҙәрен бөтөнләй иркен, хужаларса тота башлауҙары күптәрҙең һарыуын ҡайната ла инде. Быныһы- бер булһа, уларҙың ауыр енәйәттәр ҡылыуы инде бер ниндәй сиктәргә лә һыймай. Рәсәй Эске эштәр министрлығының былтырғы өс ай мәғлүмәттәре буйынса тап ғына ла мигранттар тарафынан ҡылынған енәйәттәр һаны 2,2 процентҡа артып, 10 меңгә барып баҫҡан! Интернет сығанаҡтарҙа 2019 йылда мигранттар тарафынан ҡылынған иң ауыр енәйәттәр исемлеге баҫылып сыҡҡан. Был хаҡта ентекләп һөйләү түгел, уҡыуы ла бик ауыр. Мәҫәлән, Якутск ҡалаһында Ҡырғыҙстандан килгән мигрант 36 йәшлек ҡатынды көсләй һәм уны бәйләп, машинаһына ултыртып ала ла, автосервиста эшләгән ике дуҫына бурысын түләү хаҡы итеп ҡалдырып китә. Мигранттарҙың өсөһө лә бөгөн төрмәлә ултыра. Владимир өлкәһе Покров ҡалаһында 16 йәшлек ике үҫмер ҡыҙ бала тажик тарафынан мыҫҡыллана. Ә инде танылған көрәшсе Сергей Чуевтың фажиғәле үлеме бөтөн илде тетрәтте. Ауырлы ҡатынды алты тажик-мигрант тырнағынан ҡотҡарырға ташланған спортсыға бысаҡ ҡаҙалар. Был хәл Мәскәүҙә була. Элек спецназда хеҙмәт иткән Никита Белянкин да шундай уҡ фажиғәгә тарый. Көстәр тигеҙ булмауға ҡарамаҫтан, ул ике рус егетен дөмбәҫләүсе Кавказ егеттәренә ташлана һәм улар бысағынан һәләк була. Шул уҡ Мәскәүҙә былтыр 6 августа мигранттар ҡатнашлығында 60 кеше күмәк һуғыш ойоштора. Былар ҙан тыш, ситтән килеүселәр араһында рөхсәт ителмәгән йәшерен террористик төркөмдәр менән бәйләнештә тороусылар, наркотик һатыусылар, кеше талаусы, бурҙар һәм башҡа шундай әтрәгәләмдәр етерлек.

Шулай итеп, яҡшығамы, яманғамы - пандемия мигранттарҙың күбеһен өйҙәренә "ҡыуып" ҡайтарҙы. Шунан, хәҙер рәсми булмаған мәғлүмәттәр буйынса 4-5 млн эшһеҙҙәре булған Рәсәйҙә мигранттарҙы алмаштырырлыҡ ташсылар, сварщиктар, шоферҙар һәм башҡа һөнәр эйәләре юҡмы ни? Бар, әлбиттә, ләкин улар әлеге арзан эш көсөн алыштырырға теләмәй, ә лайыҡлы эш хаҡы талап итә. Шул уҡ ваҡытта, 49 йыл буйы төҙөлөш колледжында уҡытҡан Лилиә Мәүлиева әйтмешләй, Рәсәй барыбер ҙә квалификациялы эшсе көстәргә ҡытлыҡ кисерә. Мигрант көстәрҙе ҡулланыуҙа ла һаҡ булырға кәрәк, тип иҫкәртә ул, сөнки улар бит үҙҙәре өсөн төҙөмәй (мәҫәлән, торлаҡ һәм башҡа объекттарҙы), тимәк, яуаплылыҡ та алмай үҙ өҫтәренә. Уларҙың квалификация кимәле лә бик самалы, күпселегенең махсус белеме юҡ. Шуға күрә уларҙы төп эш көсө булараҡ ташламалы шарттарҙа илгә саҡырып ятыу дөрөҫ түгел. Беҙгә үҙебеҙҙең эшсе кадрҙарҙы әҙерләүгә көс һалырға кәрәк. Эште сығарылыш класс уҡыусылары араһынан башлап, уларҙы эшсе һөнәрҙәргә йәлеп итергә, ҡыҙыҡһындырырға, уҡытырға кәрәк. Элек-электән Рәсәйҙең "арҡа һөйәген" тәшкил иткән эшсе синыф бөгөн юғалып ҡалырға тейеш түгел, киреһенсә, артабан йәшәргә, үҫешергә, заманыбыҙҙың белемле һәм әүҙем синыфы булып ҡалырға бурыслы.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? 1 апрелдән 3-тән 7 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләр арттырылған пособиеға дәғүә итә. Ошондай сараларҙың балалы ғаиләләргә ниндәй кимәлдә ярҙамы тейә?

***Ильвира ӘҒЛӘМОВА, Ейәнсура районы:*** Балалар пособиеһының артыуы, һис шикһеҙ, һөйөнөслө. Әммә ғаиләнең килеменә, статусына, мөлкәтенә ҡарамай, бер ниндәй белешмә, документ йыймай ғына барыһына ла бирелһен ине ул. Бына шул сағында ярҙам тип атарға мөмкин булыр ине.

Дәүләт хәҙер шул тиклем ярҙам итә, ни эшләп бала тапмайҙарҙыр инде ул бөгөнгө йәштәр? Декрет аҡсаһын да күпләп алалар, икенсеһе тыуһа ярты миллион һум түләйҙәр. Өсөнсөһө өсөн бушлай ер участкаһы бирәләр. Беҙҙең заманда, атап әйткәндә, туҡһанынсы йылдар башында балаларға бер ниндәй пособие алмаһаҡ та, өс бала табып үҫтерҙек. Мин үҙем тәүге икәүһенә балалар аҡсаһын бер тин дә ала алманым. Эш хаҡым 37 йә 87 һумға артыҡ килә лә сыға. Аҙаҡ юллап та торманым. Ҡайһы берәүҙәрҙең килемен аҙайтып күрһәтеп, ялған белешмә менән пособие эшләткәнен ишеткәнем булды, әммә минең үндай танышлыҡтар юҡ ине. Азыҡ-түлек менән атай-әсәй ауылдан ярҙам итеп торҙо, үҙебеҙҙең эшләгән-тапҡан кейемгә, юлға, коммуналь түләүҙәргә тотонолдо. Тәүге икәүһенә ала алмаһам да, өсөнсө балаға бер аҙ алдым, унынһын суммаһы ла тауыҡ көлкөһө ине инде. Балаларҙы көскә уҡытып сығарҙыҡ, тиһәм, бер ҙә арттырмайым.

Әле бына 3-тән 7 йәшкә тиклемге балаларға пособиелар тураһында һөйләйҙәр. Ошондай йәш сиклеүен дә бик аңлап етмәйем мин. 7 йәштән үткәндәр бала түгелме ни? Уларға нисек йәшәргә? Бына минең үҙемдең улымдың 8 һәм 10 йәшлек ике улы үҫеп килә, улар башҡаларҙан нимәһе менән кәм? Улар үҫкән һайын кәрәкле сығымдар күләме лә арта. Түңәрәккә, өҫтәмә занятиеларға, секцияларға йөрөйҙәр. Ата-әсәһе үҙҙәре машинала йөрөтөргә тырышһалар ҙа, таксиҙа ҡайтырға ла тура килә. Бына шуның кеүеккә күп китә бит ул аҡса.

3 йәшкә тиклемгеләргә лә түләнмәүенә аптырайым. Икенсе улыбыҙҙың ғаиләһе лә был пособиены алыу хоҡуғына эйә түгел, сөнки ҙурына әле өс йәш тулмаған, бәләкәсенә - 8 ай. Әгәр йәш сикләүе булмаһа, нисек яҡшы булыр ине. Балаларым, әлбиттә, насар йәшәмәй. Кейергә кейеме бар, ашарҙарына ла етерлек. Тик ошо пособиены ала алмауҙарына ғына йән көйә, бала тәрбиәләгән ғаиләлә артыҡ аҡса буламы ни?

Балалар пособиеһы ғына, әлбиттә, йәшәү кимәлебеҙҙе, тормош сифатыбыҙҙы тулыһынса күтәрмәй. Бөтә ғаиләләр ҙә етеш йәшәһен өсөн етерлек эш хаҡы булған эш урындары булдырырға кәрәк. Ҡалаларҙа ғына түгел, ауылдарҙа ла. Шул ваҡытта балалар ҙа тыуыр, тәбиғи артым да, әүҙем ғүмер оҙайлығы ла ҡуҙғалыр. Айлыҡ аҡсаһы йәшәү минимумынан да кәм булған ғаиләләрҙең бала табырға йөрьәт итеүен бөгөн хатта батырлыҡ тип уйларға ла урын бар.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығының 19 апрелдәге бойороғо менән Элина Ғатауллина Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының башҡарма директоры итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары булып эшләне. Комитет 1998 йылдың 25 ноябрендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән ойошторолған. Уның башҡарма директоры булып оҙаҡ йылдар Өлфәт Йомағужин эшләне.

✓Нияз Фазылов Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем Нияз Фазылов тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары булып эшләне.

✓Башҡортостан - ауыл хужалығы продукцияһын етештереү күләме буйынса Рәсәйҙең ун тәбәге иҫәбендә, тип хәбәр иттеләр республика статистиктары. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһының 3,1 проценты Башҡортостанға тура килә. Дөйөм алғанда, былтыр республикала 189,6 миллиард һумлыҡ ауыл хужалығы продукцияһы етештерелгән. "Башҡортостан илебеҙ төбәктәре араһында эре малдар һаны буйынса - өсөнсө, йылҡы һаны буйынса икенсе урынды биләй", - тип белдерҙе статистиктар.

✓Майҙа Башҡортостан халҡын, шәмбе һәм йәкшәмбенән тыш, өҫтәмә өс ял көнө көтә. 1 май - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы, 9 май - Еңеү көнө һәм 13 май - Ураҙа байрамы. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында 2021 йылдың 1, 2, 3, 8, 9, 10 һәм 13 май ял көндәре булып иҫәпләнә. 30 апрелдә (йома) һәм 12 майҙа (шаршамбы) эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара, тип хәбәр итте Башҡортостан Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәте.

✓"Беренсе Республика" тарихи фильмы Израилдә үткән Shoham Film Festival халыҡ-ара кино фестиваленең конкурс программаһына һайлап алынған. Ике йыл элек сыҡҡан фильм Рәсәй, Беларусь, Төркиә, Сербия, АҠШ фестивалдәрендә ҡатнашып, юғары баһаланып өлгөрҙө. "Беҙҙең команда өсөн "Беренсе Республика" үҙенең халыҡ-ара юлын дауам итеүен һәм халыҡ-ара эксперттары ҡыҙыҡһыныуын йәлеп итеүе бик мөһим", - ти режиссер Булат Йосопов.

✔ *Йәштәр өсөн ата-олаталарының яҙмышы һәм еңеүе, замандаштары өлгө булып торорға, шуға күрә дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары ныҡлы тикшереү үтергә тейеш.*



ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!



**"Пандемия уҙған быуаттың 40-сы, 90-сы йылдарындағы демографик һөжүмдең эҙемтәләре тап килгән ваҡытҡа тура килде. Шуға ла бөгөн демография өлкәһендә хәл-тороштоң ғәҙәттән тыш икәнен аңлайбыҙ. Рәсәй халҡын һаҡлап ҡалыу - беҙҙең иң мөһим милли өҫтөнлөгөбөҙ. Беҙҙең стратегия 2030 йылға тиклем илдә уртаса ғүмер оҙайлығы 78 йәшкә етһен өсөн халыҡтың тотороҡло үҫешенә сығыу", - тип билдәләне ил башлығы һәм тағы ла бер тапҡыр илгә ябырылған инфекциянан һаҡланыу саралары хаҡында онотмаҫҡа һәм вакцинация эшләтеүгә етди ҡарарға саҡырҙы. Ил Президентының сығышындағы төп мәсьәләләргә килгәндә, ҡыҫҡаса улар түбәндәге тезистарҙан ғибәрәт:**

# МАҠСАТҠА ӨЛГӘШЕҮ ӨСӨН...

## аҙымлап алға барыу ҙа етә

● Кешеләр үҙ сәләмәтлеген башлыса шифаханаларҙа һәм курорттарҙа нығыта алһын өсөн йыл һуңына тиклем Рәсәй буйлап туристик сәйәхәттә булған граждандарға сығымдарҙың 20 процентын кире ҡайтарыу программаһы йыл һуңына тиклем оҙайтыла.

● Студенттар туризмына өҫтәмә мөмкинлектәр биреү маҡсатында пилот проекттар эшләй башлаясаҡ, шул иҫәптән ил буйлап сәйәхәткә сыҡҡан студенттар университет кампустарында һәм ятаҡтарында туҡтала аласаҡ.

● Үҙен олимпиадаларҙа, ирекмәнлектә һәм ижади инициативаларҙа күрһәтеүселәр, "Рәсәй - мөмкинлектәр иле" платформаһы проекттарында ҡатнашыусылар өсөн туристик путевкаларҙың өлөшләтә хаҡы хатта каникул ваҡыттарында ла кире ҡайтарыласаҡ.

● Ил буйынса алдағы өс йылда ауылдар, ҡала тибындағы ҡасабалар, бәләкәй ҡалалар барлығы 5 мең яңы "Тиҙ ярҙам" машинаһы менән тәьмин ителәсәк.

● 2022 йылдан "социаль ҡаҙнасылыҡ" принцибы индерелергә тейеш һәм уға ярашлы барлыҡ социаль түләүҙәр (шул иҫәптән алимент юллау ҙа) "бер тәҙрә" режимында атҡарыласаҡ, йәғни кеше инстанциялар буйлап документ юллап сапмаясаҡ, ә был дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙең күпселеге дистанцион рәүештә, аҙнаһына ете көн 24 сәғәт буйы күрһәтеләсәк.

● Синыф етәкселеге өсөн түләнгән 5 мең һум аҡса бынан ары техникум һәм колледждарҙың төркөм етәкселәренә лә биреләсәк.

● Педагогик вуздарға капиталь ремонт үткәреү һәм техник яҡтан йыһазландырыу өсөн 10 миллиард һум аҡса бүленәсәк.

● Йәштәр өсөн ата-олаталарының яҙмышы һәм еңеүе, замандаштары өлгө булып торорға, шуға күрә дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары ныҡлы тикшереү үтергә тейеш.

● Алдағы өс йылда ауыл, Рәсәйҙең тарихи ҡалалары мәҙәниәт йорттарын, китапханаларҙы, музейҙарҙы яңыртыуға 24 миллиард һум бүленәсәк.

● Заманса цифрлы платформала "Белем" йәмғиәте эше ҡабаттан тергеҙеләсәк.

● Мәҙәниәт, сәнғәт һәм ижад өлкәһендәге проекттарға ярҙам итеү өсөн Мәҙәни инициативалар Президент фонды ойоштороласаҡ, быйыл уның гранты иҫәбенә конкурс нигеҙендә мең ярымдан ашыу креатив команда финансланасаҡ.

● Әле белем усаҡтарын тамамлаусыларҙың 60 проценты бюджет урындарында уҡый ала. Алдағы ике йылда вуздарҙа тағы ла бюджет урындары асыласаҡ, уларҙың 70 проценты белгестәр талап ителгән төбәктәргә биреләсәк.

● Быйылдан башлап ил субъекттарындағы 100 вуз студент технопарктары, бизнес-инкубаторҙар асыу, уҡытыу-лаборатория базаһы һәм уҡыу программаларын яңыртыу өсөн 100 миллион һумдан күберәк гранттар аласаҡ.

● 2024 йыл һуңына тиклем федераль бюджеттан граждандыҡ, шул иҫәптән фундаменталь тикшеренеүҙәр өсөн 1 триллион 630 миллиард һум аҡса бүленәсәк. Шул уҡ ваҡытта ил өсөн мөһим булған йүнәлештәр буйынса инновацион программалар эшләй башлай.

● Яңы энергетика, яңы фармацевтика, климат проблемаларын хәл итеү иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең барлыҡ тармаҡтарын модернизациялау өсөн ҡеүәтле стимул булырға тейеш.

● Предприятие хужаларына зыянды бөтөрөү, сәнәғәт майҙандарын рекультивациялау буйынса финанс яуаплылығын билдәләгән законды ҡабул итеүҙе тиҙләтеү кәрәк. Тәбиғәт иҫәбенә килем алғанһың икән - артыңдан таҙартырға тейешһең.

● Илдең 12 эре индустриаль үҙәгендә атмосфераға зыянлы ҡалдыҡтар ташлау 2024 йылға 20 процентҡа кәмергә, был сәнәғәтте, ТКХ, транспорт, энергетиканы комплекслы модернизациялау иҫәбенә башҡарылырға тейеш.

● Былтыр ҡабул ителгән бәләкәй һәм урта бизнес өсөн страховка иғәнәһе күләме артабан да 15 процент булып ҡаласаҡ.

● Коммерция бурысы кимәле юғары булған төбәктәргә ярҙам маҡсатынан бурысы килеменән 25 процентҡа артҡан төбәктәр 2029 йылға тиклем түләү шарты менән бюджет кредиттары менән тәьмин ителә.

● Йыл һуңына тиклем илдә хеҙмәт баҙары тергеҙеләсәк.

● Ике айҙан түләү ваҡыты үткән эпидемияға ҡаршы көрәшкә бәйле төбәктәргә бирелгән бюджет кредиттары ла 2029 йылға тиклем оҙайтыла.

● 2023 йыл һуңына тиклем йылына 3 процент өҫтәмә менән 15 йылға 500 миллиард һумдан да кәм булмаған инфраструктура бюджет кредиттары биреү планлаштырыла. Коммерция бурысы ҙур булмаған төбәктәр инфраструктура кредитын күберәк алыу хоҡуғына эйә.

● Йыл һайын 120 миллион квадрат метр торлаҡты сафҡа индереү күҙаллана.

● Хөкүмәткә төбәктәрҙә йорттарына газ инмәгән хужалыҡтарға газ индереүҙең аныҡ планын эшләү йөкмәтелә. Ауылдарҙа газ үткәргәндә шәхси участкаларҙа йәшәүсе граждандар үҙ участкаһына ингән өлөш өсөн генә түләй.

● Мәскәү - Ҡаҙан тиҙ йөрөшлө автомагистрален өс йылда тамамларға һәм уны Екатеринбургҡа тиклем һуҙырға, 2024 йылға Балтиканан Уралға тиклем илдең Европа өлөшөн хәүефһеҙ тиҙ йөрөшлө юл менән тәьмин итергә.

● Тиҙҙән туристик инфраструктураны реконструкциялау һәм төҙөлөш эштәре алып барыу маҡсатында льготалы кредит программаһы эшләй башлаясаҡ. Ул 15 йылға күҙаллана һәм йыллыҡ ставка 3-5 процент тәшкил итәсәк.

● Рәсәй сәйәсәтенең халыҡ-ара аренаһындағы мәғәнәһе һәм асылы - ил тотороҡло үҫешһен өсөн граждандарҙың хәүефһеҙлеген һәм именлеген һаҡлау.

● 2024 йылға Рәсәй ғәскәрҙәрендә заманса ҡорал һәм техника өлөшө 76 процент тәшкил итә, ядро триадаһында - 88.

"Беҙгә алға барырға кәрәк. Үҫештең милли маҡсаттарын билдәләнек. Хөкүмәткә 1 июлгә тиклем Рәсәйҙе үҫтереүҙең яңы социаль-иҡтисади инициативаларын әҙерләгәндә Мөрәжәғәтнамәлә билдәләнгән бурыстарға иғтибар йүнәлтергә тәҡдим итәм. Көндәлек эш менән булып, беҙ стратегик үҫеш, милли маҡсаттар тураһында онотторға тейеш түгелбеҙ һәм уларға өлгәшеү өсөн механизмдарҙы камиллаштырырға бурыслыбыҙ. Ә хәҙер тағы бер тапҡыр Рәсәйҙең барлыҡ граждандарына мөрәжәғәт иткем килә: беҙ алдыбыҙға ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ", - тип йомғаҡланы сығышын ил Президенты.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## "ГАРАЖ АМНИСТИЯҺЫ"



**Дәүләт Думаһы комитеты "гараж амнистияһы" тураһында закон проектындағы төҙәтмәләрҙе ҡараны. Икенсе уҡыуҙа бер нисәһе хупланды.**

Мәҫәлән, төбәктәр һәм районда әҙерләнергә өлгөрһөн өсөн закондың үҙ көсөнә инеү ваҡытын 2021 йылдың 1 сентябренән һәм 2026 йылдың 1 сентябренә тиклем билдәләргә тәҡдим ителә. Граждандарҙы артыҡ ҡағыҙ эшенән азат итеү өсөн ерәр ғариза менән генә ер участкаһын биреү һәм гаражға хоҡуҡты рәсмиләштереү механизмы ҡарала. Тағы бер төҙәтеү "гараж амнистия"һы 2004 йылдың 30 декабренә тиклем металдан эшләнгән, капиталь булмаған гараж төҙөлгән ер участкаларына ҡағыла. Башҡаларҙан гараж һатып алған граждандар ҙа уны файҙалана ала һәм ер участкаһына һәм гаражға милек хоҡуҡын рәсмиләштерергә мөмкин. Шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлеге сикләнгән кешеләр өсөн гарантиялар нығытыла. "Бындай закон проектын ҡабул итеү гараж һәм уның аҫтындағы ер участкалары менән иркен эш итеү мөмкинлеген бирәсәк. Был объекттарға хоҡуҡты рәсмиләштереү киләсәктә үҙ хоҡуғының яҡларға булышлыҡ итәсәк", - ти Дәүләт Думаһы депутаты Рафаэль Мәрҙәншин.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡортостан ташҡындың беренсе юғары нөктәһен үтте, 28 апрелдән 1 майға тиклем ташҡындың икенсе юғары нөктәһе көтөлә. Әле Ағиҙелдә һыу кимәле - 630 сантиметр, тәүлек эсендә 11 сантиметрға кәмегән. Дим һәм Өфө йылғаларында һыу кимәленең 6 сантиметрға артыуы күҙәтелә. Өфө йылғаһының кимәле - 687 сантиметр, Димдең иһә 455 сантиметр.

✔7 майҙа, Радио көнөндә, "Динамо" стадионында республиканың киң мәғлүмәт саралары араһында легендар диктор, Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Мортазин иҫтәлегенә арналған Волейбол турниры була. Турнирҙы Башҡортостан Республикаһының Журналистар союзы, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы ойоштора. Әлеге ваҡытта Матбуғат йорто һәм муниципаль баҫмаларҙың командаһына спортсылар йыйыу бара.

✔26 апрелдә Өфөлә скверҙарҙы, парктарҙы, аллеяларҙы һәм башҡа халыҡ күп йөрөгән урындарҙы талпандарҙан, серәкәйҙәрҙән, кимереүселәрҙән эшкәртеү башлана. Республика дезинфекция үҙәгенең баш табибы Павел Мочалкин һүҙҙәренсә, быйыл өсөн һауа торошонон уңайлы булыуы, йәғни оҙайлы ямғыр яумауы шарт. Талпандарҙан эшкәртеүҙе - 9 майға, ә кимереүселәрҙән 31 майға тамамларға йыйыналар. Дезинфекция үткәргәндә ҡулланылған бөтә препараттар кеше өсөн хәүефһеҙ.

✔Дуҫлыҡ монументы янындағы Ағиҙел йылғаһы буйында 2021 йылдың навигацияһын асыу тантанаһы булып үтте. Суднолар парадында эске һыу транспорты предприятиелары һәм ойошмалары - "Башволготанкер" компанияһы, Өфө ҡалаһының йылға кисеүҙәре хеҙмәте, "Речфлот" һәм башҡалар ҡатнашты.

✔"Өфө" футбол клубы яңы баш тренер менән килешеүгә ҡул ҡуйылыуы хаҡында иғлан итте. Ул - Мәскәүҙең "Велес" клубында ошондай уҡ вазифала эшләп киткән 37 йәшлек Алексей Стукалов. Баш ҡала командаһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, килешеү 2023 йылдың июненә тиклем иҫәпләнгән.

✔Мәскәү-Өфө авиарейстары быйыл ҡышын иң популяр булған 10 йүнәлеш иҫәбенә ингән. Ил буйынса осоуҙың уртаса хаҡы 6252 һум булған. Рейтингта беренсе урында Мәскәү-Сочи йүнәлеше тора (бер яҡҡа билет хаҡы - 4888 һум). Икенсе урында Мәскәү-Санкт-Петербург (бер яҡҡа - 2544 һум). Өсөнсө урында - Мәскәү-Симферополь (уртаса 5039 һум).

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Журналистың эш хаҡына бик күптән индексация яһалмаған һәм әлеге көндә район корреспонденттары 7 мең һум тирәһе, ҡала-республиканыҡылар яҡынса 13 мең һум эш хаҡына йәшәй.***

*КӨНАУАЗ*

# ЖУРНАЛИСТАРҘЫҢМЫ?

## Уларҙың да хәстәрҙәре бихисап!

**Төрлө һөнәр эйәләренең, ойошмаларҙың, етештереү тармаҡтарының эшмәкәрлеге буйынса йыл да төрлө кимәлдәге йыйылыштар, кәңәшмәләр уҙғарылып тора, йомғаҡтар яһала, киләсәккә маҡсаттар билдәләнә, мөһим социаль-иҡтисади мәсьәләләр буйынса ҡарарҙар ҡабул ителә. Мәғлүм ки, бындай сараларҙа яңылыҡтарҙы тиҙ арала таратыуҙы хәстәрләп тә, дәүләт һәм халыҡ араһында бәйләнеш булдырырға ынтылып та иң алғы һыҙыҡта киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре йөрөй. Әммә һуңғы йылдарҙа журналистарҙың эшенә йомғаҡ яһаған һәм лайыҡлыларын баһалаған, уларҙы борсоған киҫкен һорауҙарға яуап табышҡан, киләсәген хәстәрләгән саралар ойошторолғаны булманы ла, ахры. Урыҫтар әйтмешләй, итекһеҙ итексе хәлендә ҡалды был тармаҡ хеҙмәткәрҙәре. Ниһайәт, ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы инициативаһы менән Ғафури районы Красноусол шифаханаһында "Медиайыйын" милли киң мәғлүмәт саралары форумы уҙғарылды.**



Бөгөн ил иҡтисадында, хеҙмәт баҙарында барған үҙгәрештәр киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре алдына конвергент журналистика талаптары, йәғни яңыса эшләү бурысын ҡуя. Был иһә заман журналисы бер үҙе бер нисә функцияны үтәй алырға тейешлекте: мәҡәлә яҙа, видео һәм фото төшөрә, интернет сығанаҡтарға яңылыҡтар һала, социаль селтәрҙәрҙә һәм компьютерҙа эшләй белә тигәнде аңлата. Шуға ла хәҙер сара барышында уҡ журналист сайтҡа мәғлүмәт сыймаҡлап һала, шуны әллә нисә интернет сығанаҡҡа күсереп ҡуя, социаль селтәрҙәрҙә үҙенең дә, эш урынының да шәхси битен алып бара. Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, эш хаҡы бурыстарға тура пропорциональ артмай, редакцияларҙың матди-техник базаһы, эш шарттары ла - ана торһон! "Медиайыйын" форумы барышында тап ошо мәсьәлә үҙәктә булды һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың "Журналистарҙың эш хаҡын 2022 йылдың 1 ғинуарынан 25 процентҡа арттырабыҙ", тип әйтеүе шатланып ҡабул ителде. Әлбиттә, тәү ҡарамаҡҡа был проценттар бик ҙур һымаҡ, әммә журналистың эш хаҡына бик күптән индексация яһалмаған һәм әлеге көндә район корреспонденттары 7 мең һум тирәһе, ҡала-республиканыҡылар яҡынса 13 мең һум эш хаҡына йәшәй. Юҡҡа ғынамы ни һуңғы йылдарҙа, айырыуса милли баҫмаларҙа, ир-егет хеҙмәткәрҙәр һаны ҡырҡа кәмене. Ғаилә аҫрау өсөн әлеге лә баяғы Себер юлын тапау, хатта магазинда һатыусы булыу ҙа күпкә отошлораҡ тойола башланы...

Зарланыуҙан түгел, әммә журналист тормошо барыбер ҙә маҡтанырлыҡ түгел. Көнитмеше шулай ғына булғас, һөнәрҙең абруйы ла бәҫһеҙләнә бара. Бында эш хаҡы, эш шарттары һәм "Матбуғат йорто" тураһында ғына ла түгел һүҙ. Улай тиһәң, был бина ла төҙөлгәндән алып ремонт күрмәгән, һәр ҡатында икешәр-өсәр редакцияны берләштергән "теремок" һымаҡ ул. Әйткәндәй, уны республика етәксеһе 2023-2024 йылдарҙа яңыртырбыҙ, тип вәғәҙәләне вәғәҙәләүгә. Ә бына хеҙмәткәрҙәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе әлегә һауала эленеп ҡалды. Форум барышында Бөрйән районынан килгән коллегабыҙҙың: "Йәш хеҙмәткәребеҙ ғаиләһе менән дүрткә биш кенә ҙурлыҡтағы өйҙә тора, торлаҡ шартын яҡшыртырға ярҙам итергә ине", - тигән һүҙҙәренә залдағы күптәр көнләшеп тә ҡуйҙы хатта. Баш ҡалалағы редакцияларҙа эшләүселәрҙең төнәп сығырлыҡ шундай үҙ мөйөштәре лә юҡ бит әле. Ә ваҡытында Өфөнөң үҙәк урамдарында киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре өсөн махсус рәүештә күп ҡатлы йорттар һалынған, сират буйынса таратылған. Был хаҡта оло быуын коллегаларыбыҙ һағынып һөйләй ҙә бит...

Үрҙә телгә алынған социаль-иҡтисади хәлдәр тағы бер көнүҙәк мәсьәләне - йәш кадрҙар әҙерләү эшен йәнләндереүгә туранан-тура бәйле. Милли киң мәғлүмәт сараларына туған телен белгән йәштәр кәрәк, әммә улар киләсәген хәстәрләп, перспективалыраҡ һөнәрҙәр һайлай. Быныһы - бер, икенсенән, Башҡорт дәүләт университетында өс тиҫтә йыл журналистар әҙерләүсе башҡорт филологияһы, шәрҡиәтте өйрәнеү һәм журналистика факультетына 2014 йылдан алып бюджет урындар бүленмәгән һәм абитуриенттарҙы маҡсатлы рәүештә рус, башҡорт, татар төркөмдәренә бүлеп уҡытыу туҡтатылған. Былтырғы 2020-2021 уҡыу йылында факультет етәкселегә журналистика бүлегенә 15 бюджет урын һорап алып, 7 башҡорт телле студентты ҡабул итеүгә өлгәшкән. Республикала 6 телдә нәшер ителгән баҫма матбуғат һаны ғына ла 146 булыуын иҫәпкә алғанда, йәш белгестәргә ҡытлыҡ килеүе көн кеүек асыҡ. Уларҙан тыш радио һәм телевидение ла, яҡын киләсәктә цифрлы журналистиканы үҫтерергә теләһәк, электрон баҫмаларҙа ла эшләрлек кешеләр кәрәк бит.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# БАЙРАМҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ...

**Яҙ үҙ көсөнә инә башлау менән күңелдә ниндәйҙер байрам тантанаһы хакимлыҡ итә башлай. Шулай булмай ни, тиҙҙән бит байрамдарға бай май етә. Ә инде был айҙың иң ҙур ваҡиғаларының береһе - ул Еңеү көнө. Көн торошоноң, хәл-ваҡиғаларҙың ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, ул быйыл 76-сы тапҡыр ойоштороla.**

Ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәнең көн тәртибенә Бөйөк Еңеү байрамын үткәреү тураһындағы мәсьәлә сығарылғас, башҡа темалар нисектер икенсе планға күскәндәй, сөнки башҡа мәсьәләләр даими рәүештә күтәрелеп, тикшерелеп тора, ә Еңеү көнө йылына бер тапҡыр ғына килә. Баш ҡалала 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 76 йыллығын байрам итеү концепцияһы менән хакимиәт башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, был мөһим ваҡиғаға әҙерлек күптән башланған. Әлеге ваҡытта Өфөлә 5427 ветеран, шул иҫәптән 164 Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыһы һәм инвалиды йәшәй. Был категория граждандарға федераль һәм төбәк ҡануниәтендә ҡаралған барлыҡ социаль яҡлау саралары күрһәтелә. Ҡала бюджеты иҫәбенә ветерандар йәшәгән фатирҙар һәм йорттар ремонтлана.

Юбилейҙарын билдәләгән (90, 95, 100, 105 йәш) 871 ветеранға хакимиәттең иҫтәлекле бүләге тапшырыласаҡ. Ҡала йорттары һәм биналары фасадына ҡуйылған иҫтәлекле таҡтаташтарҙы, Еңеүҙең 50 йыллығы скверында ҡуйылған мәғлүмәт стелаларын, байрам арт-объекттарын ремонтлау, яңыртыу дауам итә. Ҡаланың белем биреү һәм йәштәр учреждениеларында Бөйөк Ватан һуғышына арналған тематик синыф сәғәттәре, конкурстар, синыфтан тыш саралар үтә, "Хәтер вахталары", хәрби-патриотик акциялар, мәҙәникиңкүләм, шулай уҡ башҡа саралар уҙғарыу планлаштырылған.

9 Майҙа Өфөлә тантаналар Еңеү паркындағы мемориаль комплексҡа сәскәләр һалыуҙан башланасаҡ. Сәғәт 10-да Октябрь проспектында Өфө территориаль гарнизоны хәрбиҙәре, Башҡортостан Республикаһындағы федераль башҡарма власы федераль органдарының территориаль органдары, хәрби хәрәкәттәр һәм хәрби хеҙмәт ветерандары, курсанттар һәм уҡыу йорттары кадеттары, хәрби техника парады үтәсәк. Парадҡа барлығы 1519 кеше, 20 расчет йәлеп ителгән. Әлеге ваҡытты аҙна һайын "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда күнекмәләр үткәрелә. 5 һәм 7 майҙа Октябрь проспектында репетиция уҙғарыласаҡ. Хәрбиҙәр парадынан һуң Бөйөк Ватан һуғышы техникаһының механизациялanған колоннаһы параду башланасаҡ. Һауала иһә "Первушино" аэропорты самолеттары осасаҡ. Рус драма театры алдындағы майҙанда хәрби техника күрһәтеләсәк, унда 45 берәмек заманса хәрби техника өлгөһө буласаҡ. Сара 8 майҙа көндөҙгө 2-лә асыласаҡ, 9 Майҙа был майҙанда йылдағыса ялан кухняһы ла эшләйәсәк. Өфөлә һигеҙенсе тапҡыр "Үлемһеҙ полк" Бөтә Рәсәй граждандыҡ-патриотик акция үтәсәк. Быйыл ул онлайн форматта ойоштороласаҡ. Ленин исемендәге майҙанда ҡуйылған төп сәхнәлә көн оҙоно концерт күрһәтеләсәк. Кисен шул уҡ майҙанда һәм Машина эшләүселәр мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда байрам салюты атыласаҡ. Шулай уҡ баш ҡала райондарының һәр ҡайһыһында байрам саралары гөрләйәсәк, уларҙа Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының, Башҡортостанда тыуған Рәсәй Геройҙарының ҡатнашыуы көтөлә.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Холецистит

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр берәр сирек стакан эсергә. Был дауа бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарға килешә, әммә йөклөләргә мәтрүшкә ярамай. Шулай уҡ ирҙәргә лә был рәүешле йылына ете тапҡырҙан да күп дауаланыу кәңәш ителмәй.

### Үт ҡыуығы шеше

❖ 75-әр грамм меңъяпраҡ һәм календула, 100 грамм кукуруздың емешлек ауыҙын алып ҡушырға. 2 ҡалаҡ йыйылманы термосҡа һалып, 3 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә һәм көнөнә 4 тапҡыр 100-әр грамм эсергә.

### Ашҡаҙан

❖ Билдәһеҙ сәбәптәрҙән ашҡаҙан ауыртһа, күңел болғанһа, кесерткән тамыры ярҙам итә. 1 балғалаҡ кесерткән тамырына 1 стакан ҡайнар һөт ҡойоп, 15 минут талғын утта ҡайнатырға, һөҙөргә. Хәл яҡшырғансыға тиклем сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ашҡаҙан ауыртыуын ҡайын еләге япраҡтарынан яһалған төнәтмә лә баҫа. Әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағына 2 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға, 6-8 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Ашҡаҙан киҫкен ҡыҫып ауыртһа, меңъяпраҡ үләне һәм йүкә сәскәләрен бер тигеҙ нисбәттә алып, дауа әҙерләргә була. 1 балғалаҡ ҡатышманы термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә. Көнөнә ашарҙан 20-30 минут алда 4 тапҡыр сирек стакан эсергә. Дауаланғанда үләндәрҙе саманан артыҡ ҡулланыуҙан һаҡ булырға кәрәк.

### Әҫпе

❖ Баланың әҫпеһе (диатез) ҡалҡһа, муйыл ботаҡтары ярҙам итер. Төнәтмә өсөн муйыл ботаҡтарын йолҡоп алып (миҙгелгә ҡарамай), өҫтөнә сығарып һыу ҡойорға һәм талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Һыуынғансы төнәтергә. Ошо төнәтмә менән баланы көн дауамында сайындырырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Көньяҡ Урал алды территорияһында ҡулдан һуғылған биҙәкле әйберҙәр күп һаҡланмаған. Рәсәй этнография музейы өсөн 1957 йылда дим башҡорттарынан 4 һуғылған таҫтамал һәм 3 ашъяулыҡ һатып алынған (кол. 6973). Бер нисә таҫтамал этнография экспедициялары барышында фотоға төшөрөп алынған, уларҙың барыһы ла тиерлек Ағиҙел аръяғының урта тирәһендәге урындарҙан (Ишембай, Мәләүез райондары). Әйберҙәрҙең күбеһе XX быуат башында туҡылған. Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында күтәреп һуғыу алымы һуңғы осорҙа барлыҡҡа килеүен биҙәкләүҙә аныҡ ҡағиҙәләр юҡлығы, орнаменттың композиция төҙөлөшө сағыштырмаса иркен, хатта ҡайһы осраҡта көтөлмәгәнсә булыуы дәлилләй.

Аҡ таҫтамалдарҙың осо, ғәҙәттә, ҡыҙыл булған. Көнкүрештә һәм аш табынында ҡулланылған таҫтамалдар ябай күренгән: ҡыҙыл ерлекте тар ғына аҡ һыҙыҡтар арҡырыға иңләгән, уларҙың араһынан шахмат тәртибендә урынлашҡан аҡ-ҡыҙыл биҙәк һыҙаты үткән; улар "мережканы" - туҡыманан бер яҡҡа ҡаратып ҡына ептәрен тартып алып, селтәрле һыҙаттарҙан нағыш эшләүҙе хәтерләткән.



*Таҫтамал осондағы бер төрлө биҙәктәр (БР, Мәләүез районы, Иштуған ауылы). Т.К. Сурина фотоһы, 1978*

Байрам һәм йола таҫтамалдарында орнаменттар мөйөштәре бер-береһенә инеп торған кәкерсәктәр йәки мөйөштәр, һыныҡ һыҙыҡтар, берләшкән ҡыя шаҡмаҡтарҙан торған. Аласаларҙы нағышлағанда Башҡортостандың көньяғында киң таралған ағас юныу, ҡорама, күн биҙәүгә һәм башҡа ижад төрҙәренә хас булған биҙәү элементтары ҡулланылған.



*Туй таҫтамалы (БР, Мәләүез районы, Иштуған ауылы). Автор фотоһы. 1978*

Шулай уҡ ҡыҙыл ерлеккә төрлө төҫтән орнамент һалынған таҫтамалдар һәм башҡа әйберҙәр ҙә осраған. Биҙәктәрҙә аҡ, ҡара һәм һары төҫ төп һаналған, көл төҫлө, алһыу, йәшел - өҫтәлмә булған. Ҡыя шаҡмаҡтарҙан тыш, композицияла ике осло ырғаҡ (интеграл) һәм мөйөштәренең осо ырғаҡ кеүек асаланып торған фигуралар ҙа индерелгән. Мөйөштәр ҡапма-ҡаршы ҡуйылған осраҡта уртала бәләкәй генә ҡыя шаҡмаҡ барлыҡҡа килгән.



*Таҫтамал (БР, Мәләүез районы, Иштуған ауылы) һәм һуғылған кейәү ҡушағында (БР, Архангел районы, Аҙау ауылы) ҡатмарлы орнаменталь композициялар. Автор фотоһы. 1978, 1962*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

КӨНАУАЗ

# ЖУРНАЛИСТАРҘЫҢМЫ?

## Уларҙың да хәстәрҙәре бихисап!

**(Башы 5-се биттә).**

Кадрҙар әҙерләү өлкәһендә тағы шуны ла иғтибар үҙәгенә алырға кәрәк: эшләп йөрөгән журналистарҙың һөнәри оҫталығын арттырыу, камиллаштырыу йәһәтенән дә эштәрҙе йөнләндереү зарур. Бигерәк тә милли баҫма матбуғатты уҡымлы итеү өсөн интернет сығанаҡтар менән тиҙлеккә тиңһеҙ көрәштереү урынына аналитик мәҡәләләргә өҫтөнлөк биреп, халыҡты тап шуның менән арбау, был маҡсатта йәштәр араһынан фекерле, үткер ҡәләмлеләрҙе аналитик журналистика оҫталығына өйрәтеү мөһим. Юғиһә, әлеге лә баяғы оло быуын журналистарынан үҙҙәренең бөтә Советтар Союзы һәм сит илдәрҙән йыйылған коллегалары менән съездарҙа, ижади осрашыуҙарҙа ҡатнашыуҙары, сит илдәргә эш сәфәрҙәре менән барыуы, ул замандың иң шәп ҡәләм оҫталары менән тәжрибә уртаҡлашыуы хаҡында һағынып һөйләтергә генә ҡалды. Бығаса эшмәкәрлеге тейешле иғтибар, ярҙам булмау сәбәпле туҡтап ҡалһа ла, был мәсьәләлә иң ҙур ярҙамды Башҡортостан Журналистар союзы күрһәтергә бурыслылыр.

Хәҙер кеше бөтә яңылыҡты кеҫә телефонынан ала, тип ҡупырайып, алдынғы ҡарашын белдерә бәғзеләр. Шуға, йәнәһе, гәзит-журналдарҙың данаһы ла кәмей бара һәм журналистар күптән ҡулланыусылар артынан ҡыуып, интернетҡа "күсеп китергә" тейеш. Ләкин "Медиайыйын" тап киреһен асыҡланы: республикала милли матбуғатты яҙҙырып алып уҡырға теләүселәр етерлек, тик уларҙың күбеһенең күңеленә ятҡан барлыҡ гәзит-журналдарҙы ла һатып алырға кеҫә яғы самалы. Бигерәк тә ауыл кешеһенә ҡыйынға тура килә, сөнки район гәзиттәренә яҙылыу хаҡы 1000 һумдан ашыу, ә тағы республика, Рәсәй матбуғатын да алдырһаң? Республика Башлығы Радий Хәбиров был мәсьәләне төрлө яҡлап өйрәнеп, хәл итеү юлдарын барларға йөкмәтте. Шулай уҡ ведомстволарға республиканың милли матбуғатына яҙылыу өсөн дәүләт махсус матди ярҙам күрһәтһен ине, тигән тәҡдим индерелде фекер алышыуҙа. Сөнки, һанай китһәң, республикала 1700 тирәһе китапхана, 818 ауыл советы, 9 ҡала округы һәм быларҙан тыш белем усаҡтары, юғары уҡыу йорттары, музей һәм мәҙәниәт усаҡтары ла бихисап. Ә шулай ҙа яратҡан баҫмаларыбыҙҙың данаһы кәмеп, бөлгөнлөккә төшөүендә "Рәсәй почтаһы"ның да ғәйебе юҡ түгел. Был ойошманы ла оптимизация "дауылы" урап үтмәне, почта хеҙмәткәрҙәренең дә ауыр эш шарттарында дәрт-дарманы ташып тормай. Форумда ҡатнашыусылар республика етәксеһенән бер тауыштан гәзит-журнал ташыу эшен яйға һалырға ярҙамлашыуын һораны.

Киң мәғлүмәт саралары - дәүләт органдары, власть структуралары менән ябай халыҡтың араһын яҡынайтыусы, береһенең хәлен икенсеһенә аңғартыусы, дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыусы. Бына ошо бурыстарҙы үтәгәндә көнүҙәк мәсьәләләр, берәй хәл-ваҡиға тураһында дәүләт идаралыҡтарында эшләгән белгестәрҙең фекерен халыҡҡа башҡорт телендә еткереү өсөн журналистарға бик күп көс түгергә тура килә. Ярай гәзит-журналдар русса һөйләүсене лә башҡортсаға матур тәржемә итеп яҙып ҡуя ала, ә бына радио-телевидениеға тауышын яҙҙырыу, йә тура эфирҙа фекер алышырға саҡырырлыҡ башҡорт телен камил белгән кадрҙар республика ведомстволарында юҡ тиерлек. Ябай кеше аңларлыҡ телдә һөйләшкән, шул уҡ ваҡытта социаль-иҡтисади, сәйәси темаларҙа балыҡ кеүек йөҙгән эксперттар берләшмәһен булдырыу, һис шикһеҙ, мөһим мәсьәлә. Юғиһә, күреп торабыҙ, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ла шундай әһәмиәтле тапшырыуҙарын алып барыу өсөн студияға саҡырырға башҡорт телен белгән экспертты таба алмай. Быны ла форумда ҡатнашыусылар республика етәксеһенә тура әйтеп һорарға мәжбүр булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ике көн дауамында уҙғарылған "Медиайыйын" форумы милли киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең күптән уртаға һалып һөйләшә торған мәсьәләләренә байҡау яһап, республика етәкселегенә ишеттерергә мөмкинлек биреүе менән әһәмиәтле булды. Бында яңғыраған һорауҙарҙың барыһына ла Башҡортостан Башлығы хәл итербеҙ, ҡарарбыҙ, тип ыңғай яуап ҡайтарҙы. Аңлашыла, барыһын да бер юлы, тиҙ арала эшләп булмаһа ла, боҙ ҡуҙғалды...**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АФАРИН!

# ИҢ ЯҠШЫ БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ...

## Өфөлә һәм Хәйбуллала



**Ошо көндәрҙә баш ҡалала Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институтында "Тәрбиә һәм белем биреү башҡорт телендә алып барылған иң яҡшы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы" төбәк-ара конкурсына йомғаҡ яһалды.**

Балалар баҡсалары араһындағы был ярыш беренсе тапҡыр үткәрелә һәм унда бөтәһе 55 учреждение һынау тотҡан, шул иҫәптән Силәбе һәм Һамар өлкәләренән дә ҡатнашҡандар. Конкурс "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һәм дәүләт телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә февраль башынан март аҙағына тиклем дистанцияла ойошторолған. Ярыш ике этаптан торған, һөҙөмтәлә иң яҡшы 20 ауыл, 10 ҡала мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы билдәләнгән. Улар араһында юғары эш һөҙөмтәһе күрһәткән Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының "Шатлыҡ" 3-сө балалар баҡсаһы (мөдире Зәбирә Бикбаева), Өфө ҡалаһының 308-се Башҡорт балалар баҡсаһы (мөдире Фәйрүзә Мусабирова) абсолют еңеүселәр тип табылған.

Еңеүселәрҙе тәбрикләрҙән алда БР Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы етәксеһе Булат Зинуров, бүлек мөдире Розалия Сафиуллина, БР Мәғарифты үҫтереү институты хеҙмәткәрҙәре, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ педагогтары һәм балалар баҡсалары хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында "Башҡорт теле - балаларға" тигән түңәрәк ҡор ойошторолдо. Уның барышында мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары өсөн башҡорт телле йәш кадрҙар әҙерләү, тәрбиәселәргә квалификация яңыртыу, методик ярҙам күрһәтеү кеүек актуаль мәсьәләләр ҡаралды. Әйткәндәй, тиҙҙән балалар баҡсаһында башҡорт телендә белем биреү өсөн "Бала саҡ" һәм башҡорт телен өйрәтеү маҡсатында "Шатлыҡ" программалары нәшер ителәсәк. Ә бына М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла буласаҡ тәрбиәселәрҙе әҙерләгән яңы уҡытыу йүнәлеше асыла. "Башҡорт балалар баҡсаһында бик матур эш һөҙөмтәләренә өлгәшкәндәргә республика кимәлендә тәжрибәһен күрһәтеү өсөн ҡулай конкурс барлыҡҡа килеүенә шатландыҡ. Мәктәп өлкәһендәге кеүек грант программалары ла булдырылһын ине. Беҙҙең балалар баҡсаһында 13-төң 6-һы - башҡорт төркөмдәре. "Башҡорт йәйләүе" ҡоролмалар төҙөү үҙәгебеҙ бар, бында 5 йәштән алып балалар бик теләп шөғөлләнә һәм башҡорт халҡының кәсептәренә лә өйрәнә. Атай-олатайҙар ярҙамы менән ете төр умарта өлгөһө, ауылдың эшҡыуарҙары, балта оҫтаһы Рәмил Билалов ике төр тирмә макеттарын эшләп бирҙе. Балалар схемаларға ҡарап, шул тирмәләрҙе үҙҙәре ҡороп ҡарай", - ти Аҡъяр ауылының "Шатлыҡ" 3-сө балалар баҡсаһы мөдире Зәбирә Бикбаева.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Йәлдәк ырыуы башҡорттары нигеҙ һалған ауылдар хәҙерге Башҡортостандың Борай, Дүртөйлө, Илеш, Ҡариҙел, Нуриман һәм Саҡмағош районларына ҡарай. XV-XVI быуаттарҙан алып XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем улар үҙҙәрен башҡорт халҡының айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп һанай, тап шуға күрә улар 1897 йылғы Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу барышында, башҡа төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кеүек үк, үҙҙәренең һөйләш телен туған башҡорт теле итеп яҙҙыра.**

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘЛДӘК,

## Дәште Ҡыпсаҡ вариҫтары булабыҙ



Ғөмүмән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ауылдары мәктәптәрендә XX быуатта, советтарҙың милли сәйәсәтенә ярашлы, һөйләш телдәренең рәсми рәүештә ҡабул ителгән яңы башҡорт әҙәби теле менән тап килмәүе арҡаһында, татар яҙма әҙәби теле уҡытыла башлай. Һөҙөмтәлә уларҙың байтағының милли берҙәйлеге лә үҙгәреш кисерә. Былар - тарихи факт. Тик шуныһы: башҡорттарҙан айырмалы, татар этнонимы аҫтында танылыу тапҡан төрки сығышлы күршеләребеҙҙең йәшәйешендә этник кландар - ырыуҙарға хас үҙбилдәләнеш тулыһынса онотолоуға дусар ителеп, юҡҡа сыҡҡан. Тап шуға күрә тарихи сығанаҡтарҙа ҡазанлыларҙың (һуңынан - татарҙарҙың) ырыу шәжәрәләре хаҡында мәғлүмәт юҡ, уларҙың айырым ырыуҙарға һәм ошоға ярашлы олоҫтарға бүленеүе лә бөтөнләйе менән булмай.

Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙағы кеүек үк, этник төркөмдәргә бүленеп йәшәгән төрки ҡәүемдәрендә - ҡаҙаҡтарҙа, ноғайҙарҙа, төркмәндәрҙә, ҡырғыҙҙарҙа, ҡарағалпаҡтарҙа, үзбәктәрҙә, ҡырымлыларҙа - бер үк ырыу этнонимды ҡабул иткән хәлдә лә, ырыуҙар системаһына хас көнитмеш ҡанундары быуаттар дауамында теүәл үтәлә килә. Шуныһы ла мөһим: ошо этностарҙың ырыуҙарға бүленеп йәшәү тарихы әлегә тиклем халыҡ хәтеренән юғалмаған.

Был ижтимағи феномендың үтә боронғо тарихи тамырҙары бар. Ул тамырҙар ҡеүәтле һун державаһы, Төрки һәм Хазар ҡағанаттары, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа осорҙарынан алып һаҡланып ҡалған. Ырыуҙар ошо дәүләттәрҙең төп йәмғиәте берәмеге булып тора. Уларҙағы административ бүленеш тә, ошо системаға ярашлы, ил, иләү, ырыу (уруг), аймаҡ исемдәре менән аталып йөрөтөлә. Америка тикшеренеүсеһе Аллен Франк ошо этник үҙенсәлек хаҡында былай яҙа: "Башҡорттар араһында ҡәбилә һәм клан берҙәйлеге, дөйөм башҡорт берҙәйлеге кеүек үк, иң юғары берҙәйлек булып, әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалған".

Йәнә бына нимәгә иғтибар итеү фарыз. Башҡорттар, Мәскәү ҡулы аҫтына инеү менән, уларҙың айырым ерле төркөмдәре дәүләт чиновниктары документтарына, төрлө реестрҙарға индерелеп, теркәлеп бара. Халҡыбыҙҙың 40-тан ашыу айырым этник төркөмдәренең барыһы ла тиерлек ошо тарихи сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан. Улар араһында, XVII быуаттан башлап, Йәлдәк олоҫо (рус документтарында: Ялдацкая, Елтяцкая, Елдятская волость) ла теркәлә. Иҫке төрки телендәге сығанаҡтарҙа ырыу исеме Йәлдәк йәиһә Йәлтәк формаларында яҙылған.

Ғалим-этнограф Р.Ғ. Кузеев йәлдәк ырыуының килеп сығышына бәйле мәғлүмәттәрҙең аҙ булыуы хаҡында яҙа. Уның фекеренсә, йәлдәк ырыуы башҡорттарының атабабалары, Урта Азия далаларынан Көньяҡ Уралға табан ҡыҫырыҡланып сығарылған ҡыпсаҡтарҙың бер төркөмөнә ҡушылып, Ағиҙел йылғаһының һул яры буйындағы ерҙәрҙе биләй. Тарихсы йәлдәктәргә хас булған II, Y, X ырыу тамғаларының бер үк ваҡытта ҡыпсаҡтарҙың сарыш-ҡыпсаҡ, ҡара-ҡыпсаҡ, аҡ-ҡыпсаҡ ырыуҙары тамғалары менән бер иш булыуына иғтибар иткән. Р.Ғ. Кузеев йәлдәк этнонимын боронғо төрки тамырлы булып, байтаҡ ҡына атамаларҙың тамыр һүҙгә -аҡ, -әк, -эк, -уҡ, -үк һәм -к суффикстары ҡушылыу юлы менән хасил булыуын билдәләй: мәҫәлән, ҡаҙаҡ, ҡумыҡ, ҡыпсаҡ, бәжәнәк, емек, башҡорттарҙа шулай уҡ терһәк һәм баҙраҡ этнонимдары бар.

Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин йәлдәк этнонимының антропоним, йәғни кеше исеме менән бәйле булыуын ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләй. Был йәлдәк шәжәрәһендә лә сағылыш тапҡан: уларҙың төп бабаһы сифатында Йәлдәк исемле тархан күрһәтелә. Ошондай исемдең "йәлләү/йәлдәү" һүҙенән килеп сығыуы ла мөмкин.

Йәлдәк башҡорттарының боронғо тарихын төрки ҡәүемдәренең Дәште Ҡыпсаҡ тип аталған үтә ҙур конфедерацияһы сиктәрендә өйрәнеү фарыз. Урта быуаттарҙа улар ҡыпсаҡ атамаһы аҫтында Евразияның икһеҙ-сикһеҙ далаларында көн итә. Ә ҡыпсаҡтарҙың айырым ырыу-төркөмдәре XI - XIII быуаттарҙа уҡ Көньяҡ Уралға, Йайыҡ, Ағиҙел йылғалары үҙәндәренә килеп етеп, ошонда көн иткән башҡорттарға ҡушыла. XIII быуаттың беренсе яртыһында, монгол-татар ғәскәрҙәре Урта Азия дәүләттәрен яулап алғандан һуң, башҡа башҡорт ырыуҙары араһында ҡыпсаҡтар ҙа мөһим урын ала. Күрәһең, йәлдәк ҡәүеме лә ошо дәүерҙә башҡорт халҡы составында булыуҙы хуп күргәндер.

Алтын Урҙа дәүләтендәге үҙ-ара низағтар көсәйеп, берҙәм идаралыҡ тамам ҡаҡшағас, айырым ханлыҡтарҙың һәр ҡайһыһы өҫтөнлөк алырға тырышҡан осорҙа Ҡаҙан ханлығы, яҡын-тирәләге һуғышсан халыҡтарға мөрәжәғәт итеп, ялланма ғәскәр туплай башлай. Чингизид Олуғ-Мөхәммәт нигеҙ һалған Ҡаҙан ханлығында, башлыса, ер эшкәртеү, сауҙа итеү менән шөғөлләнгән ерле халыҡтар - Волга булғарҙары вариҫтары булған мосолман сыуаштары, мариҙар, удмурттар, Волга аръяғындағы мәжүси сыуаштар йәшәй, уларға хәрби эш ят була. XV - XVI быуаттар сиктәрендә Ҡаҙан ханлығына хәрби хеҙмәткә тархандар етәкселегендәге башҡорт яугирҙары отрядтары ла килә башлай. Ошо хеҙмәттәре өсөн уларға Ыҡ йылғаһы үҙәнендәге ерҙәрҙе биләргә рөхсәт бирелә. Ҡыпсаҡ тарханы Йәлдәк тә үҙ кешеләре менән Ҡаҙан ханлығында хәрби хеҙмәт менән көн итеүселәр составында була. Ул заманда Йәлдәктәр Ыҡ йылғаһы буйындағы Ҡыпсаҡ олоҫона бирелгән ерҙәрҙә көн итә. Ҡаҙан ханлығы Иван Грозный армияһы тарафынан яулап алынғандан һуң, XVI быуат урталарында, Йәлдәк тархан вариҫтары Ағиҙелдең ике яры буйлап, көнсығышта - Ҡариҙел, төньяҡта - Танып, көнбайышта Баҙа йылғаһына тиклемге ерҙәрҙе биләп, оло Йәлдәк олоҫон барлыҡҡа килтерә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал

Контрһөжүмдең икенсе көнөндә, 20 ноябрҙә, ҡан ҡойошло ҡаты алыштар дауам итә. 313-сө атлы полк донесениеһында бына ниҙәр теркәлгән: " ...275-се атлы полк, колонна башында хәрәкәт итеп, Блиновскийҙан ике саҡрымға көньяҡтараҡ дошман менән алышҡа инде, ул икенсе көн уртаһына тиклем дауам итте. Дошман, яу яланында 250 мәйет ҡалдырып, көньяҡҡа табан сигенде. Был алышта 275-се полк командиры, подполковник Т. Кусимов һәм 313-сө полк командиры, подполковник Ғ.Д. Макаев яраланды... 275-се һәм 313-сө полктар бер үк ваҡытта Осиновский һәм Варламов тораҡ пункттарын азат итте. Дивизияға Обливская станцияһына табан юл асылды. 24 ноябрҙә дивизияның дөйөм колоннаһында маршҡа ҡуҙғалды. 25 ноябрҙә дошман авиацияһы иртәнән кискә тиклем дивизияның боевой рәттәрен бомбаға тотто".

Ошо алыштар сағылдырылған икенсе бер документта дивизиябыҙҙың боевой ҡаҙаныштары һанап үтелә: "19 ноябрҙән 25 ноябргә тиклем Обливская станцияһын алыу өсөн барған һуғыштарҙа дивизия ундан ашыу тораҡ пункты азат итте, улар иҫәбендә Блиновский, Варламов, Аржановский, 86-сы һанлы совхоз, 1 мең кв. км ашыу ерҙе дошмандан таҙартты һәм 25 ноябргә Обливская станцияһы янына килеп етте. 25 ноябрҙә, таң атыуға, дивизия дошмандың 400-ҙән ашыу һалдатын һәм офицерын, 10 танкыһын, 120 автомашинаһын юҡ итеп, 70 кешене әсиргә алып, 2 боеприпас складын, 200-ҙән ашыу атты, 50 мотоциклды ҡулға төшөрөп, 50 боевой самолет торған аэродромға яҡынлашты (ошо самолеттар дивизияның боевой рәттәрен бомбаға тотто). 112-се кавалерия дивизияһы, 40-сы уҡсы дивизия менән менән бергә хәрәкәт итеп, 30 ноябргә тиклем Обливская станцияһы өсөн алышты, әммә һөҙөмтәһе булманы. 4 декабргә тиклем дивизия частары Деево, Паршино районында һәм артабан Чир йылғаһы буйлап оборона тотто".

Шул уҡ документта 1942 йылдың 25 ноябрендә дивизияның 25 ноябрҙәге юғалтыуҙары хаҡында мәғлүмәттәр бар. Дошман авиацияһының бер өҙлөкһөҙ бомбаға тотоуы арҡаһында ошо ҡәһәрле көндә дивизия 400 тирәһе һәләк булған һәм яраланған кешеһен, 600-ҙән ашыу атын юғалта.

### Ирҙәр үлә, башын һала...

Советтар Союзы халыҡтарының фашист илбаҫарҙарын тамам тар-мар итеп, Бөйөк Еңеү яулағанға инде 76 йыл тула. Ошо дәһшәтле лә, үлемесле лә героик заманға ҡараған документтарҙы архив залдарында ҡулыма алып, инде тоноҡланып, яртылаш юйылып бөткән һуғыш яҙмалары теркәлгән хәрби донесениеларҙы уҡығаным булды. Уларҙа - ҡайҙа ҡара менән, ҡайҙа ябай йәки химик ҡәләм менән эрелеваҡлы ваҡиғалар, тере, яраланған йәиһә батырҙарса һәләк булғандарҙың исем-шәрифтәре теркәлгән. Һандар, һандар - улар артында ваҡытынан алда фани донъянан үтеп, ил, азатлыҡ хаҡына мәңгелеккә күскән шәһиттәр - кемдәрҙәндер ғәзиздәре, аталары, ағалары, улдары...

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Заман үҙе шундайға әйләндеме, әллә артыҡ асыҡлыҡ бәләһеме, йәиһә мин-минлектең көсәйә барыуымы - йәмғиәттә ниндәй генә сара ойошторолмаһын йәки уҙғарылмаһын, шунда уҡ ян-яҡтан тәнҡит һүҙҙәре яуа башлай, шунда уҡ ниндәйҙер етешһеҙлектәр соҡоп сығарыла. Республикала беренсе тапҡыр уҙғарылған Ирҙәр форумы буйынса ла социаль селтәрҙәрҙә ҡыҙыу бәхәстәр бара, һәр кем үҙен хаҡлы һәм аҡыллы тип һанай.**
**Сәйәси ваҡиғаларға бай йыл булараҡ, күптәр уның сәйәси кампаниялар алдынан ойошторолоуына баҫым яһай.**

# АҒАС УЛТЫРТЫЛДЫ,

## Ысын ир-егеттәр



### Кемдәр ҡатнашты?

Нисек кенә булмаһын, был форум күптән кәрәк ине, юҡһа, атайҙарҙың, ирҙәрҙең үҙ позицияларын юғалта башлауы тураһында йәмғиәттә байтаҡтан һүҙ бара, әммә һүҙ һөйләүҙән ары кителмәй. Хәл-торошто үҙгәртергә теләүсе юҡ икән, тимәк, был кемгәлер кәрәк. Был юлы, шөкөр, ниндәйҙер үҙгәреш булды. Кемдәрҙендер скептик ҡарашына ҡарамаҫтан, форумды ойоштороусылар үҙҙәре лә билдәләп китеүенсә, ир-егеттәрҙе йыйыуы, бигерәк тә уларҙың үҙ теләге менән яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуына өлгәшеүе ауыр. Ә форумда ҡатнашыусыларҙы айырыуы, төркөмдәргә бүлеүе еңел ине. Ысынлап та, был форумға өс категория ир-егеттәр йыйылғайны. Беренсе төркөм: чиновниктар, улар, һәр ваҡыттағыса, матур һәм күп һөйләйҙәр. Икенсе төркөм: үҙ эшен яҡшы белгән профессионалдар; улар үҙ белемен һәм тәжрибәһен йәмғиәткә таратырға тырыша, әммә йәмғиәттәге күпселекте тәшкил иткән категория аңламаған телдә һөйләшә. Өсөнсө категория: провинциалдар, йәғни үҙәктән ситтә ятҡан территорияларҙан килеүселәр (хатта район үҙәгенән түгел, ә ауылдарҙан); улар урындағы проблемаларҙы барыһынан да яҡшы белә, уның сәбәптәрен аңлай, нимәлер үҙгәртергә тырышып, икенсе һәм беренсе категорияға аңлатып ҡарай, әммә улар тәү ҡарашҡа иғтибар менән тыңлаған да кеүек, ләкин ишетмәйҙәр (ҡолаҡтары ишетә, йөрәктәре ябыҡ).

Нисек кенә булмаһын, быуаттар буйы формалашҡан тормош рәүешен (ир -баш, ҡатын - муйын) тамырынан үҙгәртергә тырышыуҙың һөҙөмтәләрен бөгөн айыҡ аҡыллы кеше аңлай: йәмғиәттә ҡиммәттәр үҙгәреүе яҡшыға алып бармай. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың форумға тәбрикләү һүҙендә лә ошоға баҫым яһалды: "Ирҙәр иңендә яуаплы бурыстар ята. Иҡтисади, социаль тормош, балалар тәрбиәләү, ир-егеттең, атайҙарҙың абруйын күтәреү, ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлау буйынса аңлатыу алып барырға тейешбеҙ. Малайҙарға ошо төшөнсәләрҙе бала саҡтан аңлатҡанда ғына ысын ир-егеттәр тәрбиәләй һәм быуаттар буйына тупланған мәҙәни традицияларҙы быуындан-быуынға тапшыра алабыҙ".

Ир-егеттәр әүҙем түгел, тигән фекер өҫтөнлөк итһә лә, форумда ҡатнашыу өсөн 300-ҙән ашыу ғариза килгән, 51 кеше "Ил терәге" миҙалына дәғүә иткән, уҡыусылар араһында иғлан ителгән "Минең атайым" темаһына инша яҙыуҙа 500-ҙән ашыу уҡыусы ҡатнашҡан. Форум статистикаһынан күренеүенсә, унда тиҫтәләп күп балалы атай ҡатнашты. Шулар араһынан Өфө ҡалаһынан уҡытыусы булып эшләгән Валерий Семеновты билдәләп китергә мөмкин. 23 балаға атай ул бөгөн: үҙҙәренең өс балаһы эргәһенә тәрбиәгә алынған 20 бала ла һыйған уларҙың өйөнә генә түгел, йөрәгенә лә. Шулай уҡ Филүс Ильясов (Саҡмағош районы), Ишкилде Фәхрийәнов (Бөрйән районы) - 11-әр бала, Денис Куликов - 10 бала (Өфө ҡалаһы), Радик Ғәбдрәхимов (Туймазы районы) - 7 бала, Хәмит Ҡыуатов (Ейәнсура районы) - 7 бала, Валерий Маязов (Ҡалтасы районы) - 7 бала, Александр Федотов (Бишбүләк районы) 6 балалы герой-атайҙар. Әйткәндәй, Бөрйән районы хакимиәте башлығы Ғәзиз Манапов та күп балалы атай - уның ғаиләһендә 6 бала үҫә.

### Статистика ни ти?

Пленар ултырышта телгә алынған ир-аттарға ҡағылышлы статистика мәғлүмәттәре бер аҙ һиҫкәндерҙе лә. Бөгөн Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендәге кеүек үк, Башҡортостанда ла миграция һөҙөмтәһендә халыҡтың кәмеүе күҙәтелә. Бының сәбәптәренең береһе - яҡшы тормош эҙләү. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, 2021 йыл башына ҡарата республикала 4 миллион 13 мең кеше йәшәгән, шуларҙың 1 миллион 881 меңе - ир-егеттәр. Республикала гендер тигеҙһеҙлеге һаҡлана. Йыл башына 1000 ир-егеткә уртаса 1133 ҡатын-ҡыҙ тура килә. Малайҙар күберәк тыуыуға ҡарамаҫтан, 0-15 йәштә был айырма 950 булһа, 16-29 йәштә - 984, 29-39 йәштә - 1032, 50-59 йәштә - 1153, 60-69 йәштә - 1379, 70 йәштән олораҡ - 2262.

Эшкә яраҡлы категорияның кәмеүе лә дауам итә. Был һан йылына 31,4 меңгә барып баҫа (эшкә яраҡлы халыҡтың дөйөм һанынан 1,4 процент). Ҡалалағы эшкә яраҡлы халыҡ 16,7 меңгә кәмеһә, ауылда был күрһәткес - 14,7 мең кеше. Ҡалаларҙа 30-39 йәшлек ир-егеттәр өҫтөнлөк итһә, ауыл халҡы араһында 55-64 йәшлектәр күберәк. Бигерәк тә ауылдарҙа йәшәгән 80-84 йәшлек ирҙәргә иғтибар итергә кәрәк. Уларҙың бәғзеләре балаларының ярҙамынан ситтә ҡала, уларға шулай уҡ сифатлы медицина һәм социаль ярҙам талап ителә.

Йәмғиәттең социаль именлеге күрһәткесе булып халыҡтың ғүмер оҙайлығы күрһәткесе тора. Рәсәй субъекттарында был һан 2019 йылда 9,03 йыл булһа, Башҡортостанда - 10,7. Йәғни ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 11 йылға кәмерәк йәшәй. Уйланырға урын бармы? Бында ир-егеттәрҙең үҙ сәләмәтлегенә битараф булыуын төп урынға ҡуйырға кәрәктер, моғайын. Сөнки ҡатын-ҡыҙҙарҙан айырмалы, улар сирләгән хәлдә лә дауаханаға барырға атлығып тормай. Форумда шундай статистика мәғлүмәттәре менән бер рәттән, ир-егеттәргә янаған сирҙәр буйынса сығыш булһа ла зыян итмәҫ ине, моғайын. Юҡҡа ғына, сирен йәшергән - үлгән, тимәйҙәр.

### Берләшеп, бергәләшеп…

Ир-егеттәр ойошмалары юҡ, тиһәк тә, Өфө ҡалаһының Күп профилле профессиональ колледж директоры Сынтимер Баязитов белдереүенсә, Өфөлә күптән Атайҙар ойошмаһы эшләп килә. Улар атай абруйын күтәреү маҡсатында балалары менән бергә спорт менән шөғөлләнһендәрме, ғаилә менән ниндәйҙер осрашыуҙар үткәрһендәрме, балаларҙың хәүефһеҙлеге буйынса саралар ойоштороу эштәрен алып барһынмы - иң мөһиме: балалар атайҙары миҫалында тәрбиәләнергә тейеш. "Был форумды бик ваҡытлы тип һанайым һәм уның әһәмиәте ҙур һәм көслө булырына ышанам. Әлбиттә, ул күптән ойошторолорға тейеш ине. Һуңғы 100 йылда ғына ҡатын-ҡыҙҙар союздары эшләп килә. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар менән бергәләшеп балалар тәрбиәләү буйынса ла, ғөмүмән, йәмғиәттә булған барлыҡ мәсьәләләрҙе, проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеп, берләшеп хәл итеү, йөктө бер йүнәлештә һөйрәү йәһәтенән эш алып барһаҡ, көслө ойошма буласаҡбыҙ", - тип юҡҡа ғына баҫым яһаманы Сынтимер Биктимер улы. Ысынлап та, ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаларының бергәләшеп, ҡулға-ҡул тотоноп эшләүе генә алға ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү мөмкинлеге бирәсәк. Ни тиһәң дә, традицион ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлайбыҙ тибеҙ икән, ир-егеттәрҙең - айырым, ҡатын-ҡыҙҙарҙың айырым эшләүе дөрөҫ булмаҫ, сөнки ғаиләне ике енес вәкиле төҙөй һәм бөгөн ошо ике ойошманың нисек эшләп алып китеүе йәмғиәт кимәлендә ғаилә моделен дә сағылдырасаҡ: ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар бер йүнәлештә бергәләп эшләһә, тимәк, ғаиләләр ҙә шундай моделдә ҡулланасаҡ.

### Миҙал да бирҙеләр

Форумдың икенсе өлөшө секцияларҙа дауам итте. Сығыштар, креатив идеялар, тәҡдимдәр өсөн - эшҡыуарлыҡ һәм туризм; спорт, йәштәр эштәре; тарих, этнопроекттар һәм рухи-патриотик тәрбиә; кадрҙар резервы секциялары үҙҙәренең майҙансыҡтарын тәҡдим итте (һөҙөмтәләре менән Ирҙәр советының социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә танышырға, шулай уҡ нигеҙҙә ҡабул ителгән резолюцияларға өҫтәмәләр, тәҡдимдәр индерергә мөмкин). Уларҙа бөгөн йәмғиәт алдында көн үҙәгендә торған барлыҡ киҫкен проблемалар күтәрелде.

Сараның йомғаҡлау өлөшөндә беренсе тапҡыр "Ил терәге" йәмәғәт миҙалы лауреаттары бүләкләнде. "Эшҡыуар ир-ат" номинацияһында - Стәрлебаш районының Түбәнге Ибрай ауылы эшҡыуары, 3 бала атаһы Илнур Сабирйәнов, Белорет районы, Сәрмән ауылынан 3 бала атаһы, Урал спорт инвентаре заводының генераль директоры Азат Илһамов, Хәйбулла районының Юлбарыҫ ауылы крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы, 4 бала атаһы Урал Таймаҫов еңеүсе булды. "Ил батыры" номинацияһында был бүләккә Рәсәйҙең халыҡ-ара класлы спорт мастеры, хәрби алыш сәнғәте буйынса 40 тапҡыр халыҡ-ара ярыштар чемпионы Вил Ғабдуллин, "Етәксе атай" номинацияһында Асҡын районы дауаханаһының баш табибы, 3 бала атаһы Риф Ғәлиуллин, Бөрйән районы хакимиәте башлығы, 6 бала атаһы Ғәзиз Манапов лайыҡ булды. "Герой атай" номинацияһында миҙал Туймазы райо-

**✓ Беренсе Ирҙәр форумына йыйылыусылар яңы ойошма эшен ағас ултыртыуҙан башланы. Күбеһе үҙ ҡулдары менән йорттар ҙа һалғанға оҡшаған. Алда ошо ойошманы үҫтереү һәм ысын ир-егеттәр тәрбиәләү көтә.**



ны Ҡарамалы-Ғөбәй ауылы уҡытыусыһы, 7 бала атаһы (шуларҙың өсөһө тәрбиәгә алынған) Радик Ғәбдрәхимовҡа, Баймаҡ районынан 11 бала атаһы Вәкил Боҫҡоновҡа, Бөрйән районының Брәтәк ауылынан 11 бала атаһы Ишкилде Фәхрийәновҡа, Өфө ҡалаһынан уҡытыусы, 23 бала атаһы (шуларҙың 20-һе - тәрбиәгә алынған) Валерий Семеновҡа эләкте.

### Теманы дауам итеп...

***Вәнер ҠУДАШЕВ, Йылайыр районының Юлдыбай ауылындағы "Батыр" Физкультура-һауыҡтырыу комплексы директоры:*** Ирҙәр форумына районндан өс вәкил килдек. Бындай ҡорҙо һәр йыл үткәргәргә кәрәк, сөнки үҙ районыбыҙ миҫалында ғына әйткәндә, етемдәр күбәйә, эскелек проблемаһы көн үҙәгендә тора, ауылдарҙа эш юҡ, ир-егеттәр төшөнкөлөккә бирелә, битарафлыҡ һаҙлығына бата бара. Бөирҙәрҙе кем тәрбиәләй? Ысын ирҙәрҙе ғаиләлә, атай менән әсәй берҙәй яуаплылыҡ алып тәрбиәләй.

***Илнур ЗАРИПОВ, Ҡыйғы районы Алагуз ауылы, юрист:*** Халыҡ хоҡуғын һаҡлау комитеты етәксеһе булып эшләйем һәм ауыл старостаһы булып торам. Был форумға килеүемдең маҡсаты - Башҡортостандың рухлы ир-азаматтары менән танышыу, яңы идеялар алыу һәм ошонда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы районға алып ҡайтып, ауылдарға таратыу, урында ошо Советтың филиалдарын ойоштороу.

Бөгөн ир-егеттәрҙең пассивлығы тураһында ла һүҙ булды, бының сәбәптәрен тарихтан эҙләргә кәрәк: башҡортто күпме аҫҡан-киҫкәндәр, диндә лә ныҡ ҡыҫҡандар, шуға ла малайҙарҙы бәләкәйҙән тыйып өйрәткәндәрҙер, тием: шым, өндәшмә, хоҡуҡ даулама. Әммә ир кеше һүҙен дә ваҡытында егеттәр шөғөлләнергә тейешле кәсептәр, эшҡыуарлыҡ тураһындағы һөйләшеүҙәр сығырға тейештер ул. Мин ҙур, күп миллионлы инвесторҙар йәлеп итеү, меңәрләгән кешегә эш урындары булдырған проекттар тураһында һөйләргә йыйынмайым. Маҡсатым - аныҡ нәмәләр, аныҡ районлар тураһында һөйләү. Сөнки барыһы ла туристар, туроператорҙар, турагентлыҡтар, дәүләт мәнфәғәте, хакимиәттәр мәнфәғәте тураһында һүҙ йөрөтә, ә мин ябай районндың ябай ауыл кешеһе хаҡында уйланам.

Беҙ үҙебеҙҙең продукцияны сит илдәге һатып алыусыға ебәреү өсөн ағас ҡумталар эшләтәбеҙ. Әммә уларҙы өҫкә ағас ауып килгән Башҡортостанда түгел, урман булмаған Татарстандан һатып алабыҙ. Был ҡумталарҙы эшләү өсөн яңы инновацион нанотехнологиялар кәрәкмәй. Уларҙы беҙҙә эшләй алмайҙармы ни? Һәм ошонан һуң беҙ республикала туҡталам) турист килә, тиҙәр. Уйлап ҡараһаң, уларҙың һәр ҡайһыһы үҙ маршрутында кәм тигәндә 100 һум аҡса ҡалдыра. Әммә туристар унар меңләп ҡалдырырға ла риза, бары тик уларҙың зауығына тура килгән продукция, сувенирҙар тәҡдим итергә кәрәк. Ә беҙҙә әлегә урындағы түгел, ситтән килтерелгән сувенирҙар өҫтөнлөк итә.

Бөгөн ҡурғәҙмәлә Сибайҙан килгән ағас оҫтаһының эшен күрҙем. Иҫ киткес! Күпмегә һатыһың, тип һорайым. Ете мең, ти. Бындай эште ете меңгә һатыу - ул енәйәт. Уны сит илдәге ҡулланыусыға ете мең долларға һатырға мөмкин. Хәҙерге заманда бренд тауарҙарына түгел, эксклюзив тауарҙарға өҫтөнлөк бирелә. Һығымта - бөгөн беҙҙең кәсепселәр тауар етештерә, уны һата һәм үҙ урынын таба белмәй.

Икенсе проблема - турист булып күп йөрөйөм, районндарҙың туристик объекттарында юл һы. Шуның өсөн эскелеккә ҡаршы көрәшкәндә лә ауыл менән генә сикләнеп ҡалырға түгел, ә дәүләт, Рәсәй кимәлендә эш алып барырға кәрәк. Башҡа проблемалар ҙа шундай ҙур масштаблы.

Тарихи йәһәттән ҡарағанда, һуңғы ваҡытта ир-аттың статусы ла үҙгәргәндер, сөнки улар өйҙә һирәк була һәм балаларын тәрбиәләүҙә әүҙем ҡатнашмай, уларҙы үҙҙәре менән бергә эйәртеп йөрөтмәй, бергә эшләмәй. Элек, ауылда патриархаль тормош булған ваҡытта, малайҙар бәләкәйҙән, үҫмер осоронан һәр саҡ атаһының эргәһендә ярҙамлашып йөрөгән һәм атай улар өсөн өлгө булған, улар атаһына, ҡартатаһына оҡшарға тырышҡан. Хәҙерге ваҡытта тәрбиә, белем биреү процесында - балалар баҡсаһында ла, мәктәптә, өйҙә лә күпселек ҡатын-ҡыҙ менән генә аралаша балалар. Шуға күрә хәҙер балаларға ҡатын-ҡыҙҙың йоғонтоһо ҙурыраҡ. Ир балаларға ирегет тәрбиәһе кәрәк һәм Рәсәй күләмендә традицион ғаиләнең статусы һәм абруйы күтәрелергә, традицион ғаилә ҡиммәттәре һаҡланырға тейеш. Шул ваҡытта ирҙәрҙең дә, атайҙарҙың да бәҫе күтәреләсәк.

# ЙОРТҠА НИГЕҘ ҺАЛЫНДЫ...

## тәрбиәләйһе ҡалды

тә республиканың алдынғы ҡарашлы ир-азаматтарын йыйған ошондай саралар булып торһа, уның урындарҙа филиалдары ойошторолоп, ир-егеттәребеҙ ҙә ең һыҙғанып йәмәғәт эштәренә тотонһа, кире күренештәр кәмер ине, минеңсә. Был ҡорға вәкил булып килеү барлыҡ ир-азаматтарға яуаплылыҡ өҫтәй. Урындарҙа йыйылыштар үткәреп, ойоштороу эштәрен башлау бурысын алып ҡайтабыҙ. Бөгөн ир-атты ойоштороуы, ҡыбырлатыуы ауыр, тигән фекер яңғыраны, әммә башҡорта, ятып ҡалғанһы - атып ҡал, тигән мәҡәл барлығын да онотмайыҡ. Беҙҙең ауылға ғына килгәндә лә, төрлө күп саралар үткәреп торабыҙ, улар тап ир-азаматтарҙың бағыусылыҡ ярҙамында үтә. Ирҙәр әүҙем, әммә улар баҫалҡы, эшләгән эштәрен бик күрһәтеп тә, реклама-лап та бармай.

***Руслан БИККИНИН, Өфө ҡалаһы, юрист:*** Һуңғы 3-4 йылда йәмәғәт эштәре менән шөғөлләнгән кеше булараҡ, был форумды бик кәрәкле тип һанайым, сөнки беҙҙә ҡатын-ҡыҙ әүҙемерәк, ә ирҙәр бик күренмәй, улар ситтә ҡала. Киләсәктә ошо ир-егеттәр ҡорҙары һәр төбәктә, һәр ауылда эшләп китер тип өмөтләнәм. Пленар ултырышта ла минең фекерҙәремә ауаздаш сығыштар яңғыраны - бөтә нәмә ғаиләләге тәрбиәнән башлана. Беҙгә малайҙарҙан ысын ир-егеттәр үҫтерергә кәрәк. Улар әлләә ҡайҙан барлыҡҡа килмәй, уларҙы атайҙар өлгөһө тәрбиәләй. Беҙ, үкенескә күрә, балаларҙы тәрбиәләгәндә артыҡ иркәләтәбеҙ һәм йомшаҡ итеп үҫтерәбеҙ. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың, хәҙер ысын ирҙәр юҡ, тигәне менән дә килешергә була, әммә ул ысын әйтергә, бар ерҙә алдан йөрөргә һәм ҡурҡмаҫҡа тейеш.

***Бикбай НАСЫРЙӘНОВ, Әбйәлил районы Мәхмүт ауылы:*** Бындай сара күптән кәрәк ине. Сөнки үҙ ауылым миҫалында ғына әйткәндә лә, ауылда яңғыҙаҡтар бик күп. Ғаиләне алғы планға ҡуйбыҙ икән, был категория менән эшләргә лә кәрәк. Яңғыҙаҡтар үҙ парҙарын табып, ғаилә ҡорһон, тигән маҡсатта 2016 йылдың октябрендә "Танышайыҡ, ҡауышайыҡ, ғаилә ҡорайыҡ" тигән танышыу кисәләре үткәрә башланым. Ошо ваҡыт арауығында ярайһы тәжрибә тупланды, бихисап яңы ғаиләләр барлыҡҡа килде. Әлеге форумға шундай тәҡдимдәрем бар: яңғыҙы бер нисә бала тәрбиәләгән тол ирҙәр бик күп. Тол ҡатындарға ҡаралған төрлө ташламаларҙы тол ирҙәргә ҡарата ла булдырыуға өлгәшергә кәрәк; әсәләре ташлап киткән балаларын яңғыҙы ҡараған атайҙар ҙа юҡ түгел. Әсәләре балаларына алимент түләмәй һәм ярҙам итмәй. Был тәңгәлдә лә ғәҙеллек булдырылыуы мөһим, йәғни "кәкүк әсәйҙәр" шулай уҡ алимент түләргә тейеш; һәр ҡала-районда, ауыл советтарында буйҙаҡ ир-егеттәрҙең мәғлүмәт базаһын булдырырға һәм уларҙың ғаилә ҡороуына булышлыҡ итергә кәрәк. Ғаиләне беренсе урынға ҡуйып, иғтибарҙы шуға йүнәлткәндә, балалар ҙа тыуыр, ғаиләле кешенең донъяға ҡарашы ла икенсе төрлө булыр, шул саҡта ябылған балалар баҡсалары, мәктәптәр, клубтар, медпункттар ҡабат асылыр ине.

***Азамат ЮЛДАШБАЕВ, "Мосафир" ойошмаһы етәксеһе:*** Беренсе Ирҙәр форумының көн тәртибенә иң тәүҙә ирғы эшһеҙлек тураһында ауыҙ күтәреп һөйләп торабыҙмы? Ни өсөн беҙ кәрәкле нәмәләрҙе эшләүгә ситтәргә заказ бирәбеҙ? Сөнки урындағы оҫталар менән эшләп ҡараныҡ - улар йә ваҡыт тигәндә, йә сифатты онота. Башҡортостанда эшләнгән өсөн генә беҙ ундай етешһеҙлектәргә күҙ йома алмайбыҙ, сөнки беҙҙең тауарҙар бөтә донъя буйлап тарала, уларҙы Норвегиянан, Япониянан, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән, АҠШ-тан, Канаданан һ.б. алдыралар һәм бында башҡорт оҫталарының абруйы бизмәнгә һалынған.

Үҙ кәсебеңде башлар өсөн Өфөлә йәшәргә лә, Ҡунаҡһарай эргәһендә бина алырға ла кәрәкмәй. Теләһә ҡайһы районда, теләһә ҡайһы ауылда үҙ эшеңде асырға мөмкин, бының өсөн почта бүлексәһе булһын да, интернет тотһон. Ни өсөн интернет кәрәк, сөнки социаль селтәрҙәр һинең тауарыңды рекламалай, әллә ҡайһы төпкөл ауылда йәшәп, үҙенсәлекле ҡул эшен тәҡдим итһәң, таң атыуға "виртуаль урамыңда" әллә күпме сит ил кешеһе "йөрөп ятыуы" мөмкин. Бөгөн Башҡортостан кәсепселәге республика буйынса ғына ла 500-1000 эш урыны булдыра ала, әммә бының менән берәүҙең дә шөғөлләнгәне юҡ. 

Туризм тип һөйләйбеҙ. Учалы районының Әүешкүл күленә бер айҙа ғына 300 мең турист килә. Янғантауға - ай һайын 30 мең. Икенсе урынга - 20 мең. Был бик ҙур трафик. Республика буйынса йылына 600 мең (кемдер миллион ти, ҡайҙалыр тағы ла күберәк тип белдерәләр, уртаса 600 мең һанында буйында, туҙан аҫтындағы таҡта өҫтөнә продукцияларын ҡуйып һатыу итәләр. Туризмды үҫтереү тураһында тиҫтәләрсә йыл һөйләйбеҙ, район хакимиәттәрендә туристарҙы хеҙмәтләндереүсе сауҙа нөктәләрен матурлап эшләп булмаймы ни? Бары тик халыҡ өсөн бөрәү ҙә бер нәмә лә эшләмәй, тигән фекер генә тыуа. Дәүләттең иң беренсе һорауы: дәүләт халыҡтан нимә ала ала? Әйҙәгеҙ, тәүҙә халыҡҡа нисек булһа ла аҡса эшләү мөмкинлеге бирәйек. Юҡһа, әлегә 600 мең турист килгән республикала тейешле хеҙмәтләндереү кимәле булмағанлыҡтан ғына миллиардлаған һум аҡса беҙҙе урап үтә. Башҡорт телендә бер мәҡәл бар: туғаның булһа, бай булһын, бирмәһә лә һорамаҫ. Халыҡ һалым түләр, дәүләткә ниммәлер бирер алдынан тәүҙә аҡса эшләргә өйрәнһен. Бәлки, муниципалитетка ла, дәүләткә лә бирмәҫтәр, әммә улар дәүләттән дә һорамаҫ.

***Фәнүр ШАҺИЕВ, Учалы районы, тарих уҡытыусыһы:*** Минеңсә, проблемаларҙы асыҡлау, маҡсаттар ҡуйыу өсөн был форум кәрәк ине. Ошоларҙы асыҡлағас, уларҙы үтәү һәм контролләү өсөн аныҡ даталар, яуаплы кешеләр билдәләргә кәрәк буласаҡ. Шулай булған осраҡта ғына форум маҡсатына өлгәшәсәк һәм уй-хыялдар тормошҡа ашасаҡ.

Әлбиттә, үҙебеҙ генә эшләй алмайбыҙ, күп нәмәгә Рәсәй кимәлендә иғтибар итергә кәрәк. Мәҫәлән, ир-аттың тыуған еренән ситтә эшләүе йәки эсеүе ул бит Башҡортостандың ғына түгел, тотош илдең проблемаҺабантуйҙар үткәрәбеҙ икән, уларҙа боронғо уйындар өҫтөнлөк итергә тейеш, ә беҙ күбеһенсә гер күтәреү, футбол, волейбол уйындарын күрәбеҙ. Йәштәрҙе борондан ҡалған уйындарға өйрәтергә тейешбеҙ. Элек яугир уйындары булған, егеттәрҙе яуға әҙерләгәндәр, шуның өсөн улар яндан уҡ та атҡандар, һөңгө менән дә эш иткәндәр, сыбыртҡыны ла ҡуллана белергә тейеш булғандар. "Ылаҡ" уйынын ғына алып ҡарағанда ла, уның асылы ерҙә ятҡан бәрәсте күтәреп алыу түгел, ә сабып барған ыңғайы яраланып ауған яугирҙы күтәреп алыу, йәғни уны дошман ҡулына ҡалдырмау. Беҙ Учалы районында 18-27 йәшлектәр араһында ошо егеттәр уйыны, яугир уйыны кеүек халыҡ уйындарын үткәреп ҡарағаныбыҙ булды. Киләсәктә балалар һабантуйҙарынан башлап шундай уйындарҙы күберәк үткәргә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Форумды йомғаҡлап, ҡатнашыусылар Өфөлә яңы скверға нигеҙ һалып, баш ҡаланы йәшелләндереүгә үҙ өлөшөн индерҙе - ағастар ултыртты. Ир-егет был тормошта ағас ултыртырға, йорт һалырға, балалар үҫтерергә тейеш, тиҙәр. Республиканың Беренсе Ирҙәр форумына йыйылыусылар яңы ойошма эшен ағас ултыртыуҙан башланы. Күбеһе үҙ ҡулдары менән йорттар ҙа һалғанға оҡшаған. Алда эштәрҙең иң ҙуры һәм яуаплыһы көтә - ошо ойошманы үҫтереү һәм ысын ир-егеттәр тәрбиәләү.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ *Артабан белемемдә нығытыу өсөн бында ҡулайлыраҡ булыр, тип иҫәпләнек ғаиләбеҙҙең кәңәш ҡоронда. Башҡорт теле уҡытыусыһы булырға хыялланам. Һәм, әлбиттә, әлеге мәктәп базаһы менән һөнәремдең нигеҙе буласаҡ та.*



*БАЛАЛАР ҠОРО*

**Өфө ҡалаһындағы тәүге башҡорт мәктәбе, башҡорт халҡының арҙаҡлы ҡыҙы, ғалим-педагог Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы ярты быуатлыҡ юбилейын билдәләнә. Ошо уңайҙан баш ҡалала матур саралар үтте. Ә беҙ уҡыусыларыбыҙға мәктәптең эстәлеген, йәғни, уның белемле һәм фекерле балаларын күрһәтергә булдыҡ. Ошо маҡсат менән үткәрелгән әңгәмәлә гимназияның 10-сы синыф уҡыусылары Камилә Ҡыуатова, Гөлназ Әхмәтйәнова, Урал Заһиҙуллин һәм Йәдкәр Ҡунафин ҡатнашты.**

# БЫНА ШУНДАЙ БАЛАЛАР УҠЫЙ

## 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында



**Балалар, атай-әсәйегеҙ һеҙгә ни өсөн тап ошо белем усағын һайлаған тип уйлайһығыҙ?**

**Йәдкәр Ҡунафин:** Был минең туған мәктәбем, сөнки беренсе кластан ошондамын. Атай-әсәйем гимназияны эш һәм йәшәгән урынына яҡын булғанға ла, ә иң беренсе сиратта, тап башҡорт мәктәбе булғанға һайлаған. Өйҙә башҡортса аралашып өйрәнгән балаларының теле боҙолоуын теләмәгәндәр һәм үҙ мөхитендә тәрбиәләнеүен дә уйлағандар.

**Камилә Ҡыуатова:** Мине 20-сегә икенсе класҡа уҡырға алып киләләр. Бында элек минең туғандарымдың балалары ла уҡыған. Ҡала башҡорт балаларының башҡортса белем ала торған һәм милли-мәҙәни усаҡ та булған гимназияны, ғәҙәттә, зыялы атай-әсәйҙәр һайлай. Минең атай-әсәйем дә шундайҙарҙың береһе булып сыға.

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** Гимназияла беренсе йыл ғына белем алам, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында килдем. Бында гуманитар йүнәлеш көслө икәнен белеп, шул юлды һайлау өсөн мәктәпте алыштырҙым. Һәм үкенмәйем. Ысынлап та, мин теләгән предметтар буйынса төплө белем бирелә, тип иҫәпләйем. Минә оҡшай, әсәйем ҡәнәғәт.

**Урал Заһиҙуллин:** Мин дә был гимназияла беренсе кластан уҡыйым. Ике оло апайым да ошо гимназияны тамамлап сыҡты. Улар әҙәнән мине лә күп яҡтан һыналған мәктәпкә ебәрҙеләр. Атай-әсәйемә бында беҙҙең башҡортлоҡто юғалтмай уҡый һәм тиҫтерҙәребеҙ менән аралаша алыуыбыҙ оҡшай. Улар дөрөҫ һайлау яһаған тип уйлайым.

**Башҡорт гимназияһында уҡып сығыуҙың артабанғы тормошоғоҙҙа файҙаһы булырмы - нисек уйлайһығыҙ? Мәктәптән һуң ниндәй һөнәр һайламаҡсыһығыҙ?**

**Камилә Ҡыуатова:** Мин телдәр буйынса, лингвистика, тәржемә юҫығында һөнәр һайламаҡсымын. Шуға ла туғыҙынсынан һуң гуманитар йүнәлештә һайланым. Беҙҙең мәктәптә башҡорт теле кеүек үк, инглиз теленән дә, рус теленән дә яҡшы һабаҡ бирелә.

Башҡорт гимназияһында уҡып сығыуым минә, иң беренсе, шәхси ғорурлыҡ уята. Икенсенән, бында уҡытыу, белем биреү кимәле юғары. Сығарылыш уҡыусыларының тормошон күҙәткәндә генә лә ошондай һығымта яһарға була. Гимназияны тамамлаусылар барыһы ла юғары уҡыу йортона уҡырға инә һәм башлыса уңышлы кешеләр булып формалаша.

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** 20-се гимназияға тап башҡорт телен төплө өйрәнеү өсөн килдем. М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһындағы уҡытыусым Айгөл Иршат ҡыҙы Игликова миндә туған телебеҙгә ҡарата тәрән һөйөү тәрбиәләгән булһа, артабан белемемде нығытыу өсөн бында ҡулайлыраҡ булыр, тип иҫәпләнек ғаиләбеҙҙең кәңәш ҡоронда. Киләсәктә башҡорт теле уҡытыусыһы булырға хыялланам. Һәм, әлбиттә, әлеге мәктәп базаһы минең һөнәремдең нигеҙе буласаҡ та.

**Урал Заһиҙуллин:** Файҙаһы әле үк бар инде: беҙ башҡортса беләбеҙ, һөйләшәбеҙ, уҡыйбыҙ. Һәм киләсәктә лә мин үҙ ғаиләмдә башҡорт теле төп тел булыуын теләр инем. Һайлаясаҡ һөнәрем айырым телдәргә бәйле түгел, шулай ҙа был гимназияның сығарылыш уҡыусыһы булыу һәр кем өсөн дә мәртәбәле тип уйлайым.

**Йәдкәр Ҡунафин:** Гимназия минә үҙ милләтем мөхитендә мөмкин тиклем оҙағыраҡ уҡыу, йәшәү мөмкинлеген бирҙе. Бында минең дуҫтарым, һабаҡташтарым. Тимәк, оло тормошта ла минең аралашып, күрешеп-осрашып йөрөй торған яҡындарым улар буласаҡ. Ә һөнәргә килгәндә, был хаҡта, мөмкин булһа, иғлан итмәй торам.

**Ниндәй шөғөлдәрегеҙ бар? Бөгөнгө йәш кешене нимәләр ҡыҙыҡһындыра ала?**

**Йәдкәр Ҡунафин:** Бынан бер нисә йыл элек атайым менән "Мәргән уҡсы" ярышын ҡарарға барғайныҡ, миңә был шөғөл оҡшап ҡалды ла, атайым уҡ-ян һатып алып бирҙе. Шунан алып яндан уҡ атырға йөрөйөм. Бәләкәйерәк саҡта шулай уҡ атайым, егет кешегә ҡурай уйнай белеү мотлаҡ, тип әгәтләп, ҡурай түңәрәгенә ебәргәйне. Барғайным - ылыҡып киттем, яраттым ҡурайҙы. Унан гитарала ла сиртәм, ҡушылып йырлайым да.

**Камилә Ҡыуатова:** Бәләкәйерәк саҡтарҙа һүрәт төшөрҙөм. Хәҙер мин ныҡлап инглиз телен өйрәнәм. Был ҡыҙыҡһыныуымдың башы ла осраҡлыҡтан башланды. Башҡорт теле уҡытыусыһы Әлфиә Хәйрулла ҡыҙы беҙҙе М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенттарының бер әҫәрҙе сәхнәләштереүен ҡарарға алып барғайны. Шунда мин университетҡа ғашиҡ булып ҡайттым. Буклеттарҙы ҡарап, унда инглиз телен тәрәндән өйрәткәндәрен дә белдем һәм үҙем дә ныҡлап шөғөлләнергә керештем. Тел өйрәнеү күп ваҡытымды ала, шулай булһа ла бик оҡшай.

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** Мин йыр дәрестәренә йөрөйөм. Ғаиләбеҙ менән йырлайбыҙ. Унан ҡала мин бәләкәй һәм урта класс уҡыусылары өсөн башҡорт теленән репетитормын. Өйгә эштәрен эшләргә, иншалар яҙырға, тәржемә итергә, төрлө тасуирлауҙарҙы аңларға ярҙам итәм. Шулай итеп, уҡытыусы булырға әҙерләнәм.

**Урал Заһиҙуллин:** Компьютер технологияларын өйрәнәм. Бөгөн донъя медиамайҙанда эшләй, тип әйтергә була. Шунлыҡтан компьютер технологияларын, нанотехнологияларҙы белеү зарур. Унан волейбол уйнарға яратам, спорт түңәрәгендәмен. Һигеҙ йыл каратеға йөрөнөм, әммә уны ташларға тура килде. Бына шулай әүҙем һәм артыҡ әүҙем булмаған шөғөлдәрҙе алмашлап алып барам.

**Интернетҡа күпме ваҡыт бүләһегеҙ? Һеҙҙе унда нимәләр ныҡыраҡ ылыҡтыра?**

**Камилә Ҡыуатова:** Унынсы класҡа тиклем телефонды ҡулымдан төшөрмәй инем. Ололар әйтһә лә, шелтәләһә лә, интернет ныҡ ҡыҙыҡ һымаҡ ине. Әлеге ваҡытта улай түгел, интернетҡа киткән ваҡытты ҡырҡа ҡыҫҡарттым, уны ял көндәрендә генә ҡарайым. Сөнки белем алырға кәрәк, минең юғары уҡыу йортона инеүемә интернеттың артыҡ ярҙамы булмаясаҡ. Ә интернетта мин башлыса кинолар, концерттар ҡарайым, йырҙар тыңлайым. Инстаграмда йәштәрҙең көләмәстәрен ҡыҙыҡ күрәм.

**Урал Заһиҙуллин:** Интернетта мине спорт уйындары йәлеп итә. Волейбол, хоккей, бокс ярыштарының яңы тапшырыуҙарын эҙләп табам. Ә ундағы башҡа темалар мауыҡтырмай мине. Шуға ла унда күп ваҡытым китә, тип иҫәпләмәйем.

**Йәдкәр Ҡунафин:** Көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытым китәләр, бәлки, күберәктер. Интернетһыҙ йәшәй алмайым, тип әйтмәҫ инем, уға артыҡ иҫем китмәй. Ҡарағанда ла гитарала уйнап, башҡортса йырлағандарын тыңлайым. Башҡа артыҡ ҡыҙыҡ нәмә тапмайым...

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** Инстаграмдағы башҡортса вайндарҙы, ҡыҫҡа роликтарҙы ҡарарға яратам. Төрлө йырсыларҙың яңы йырҙарын көтөп алам. Йәш йырсыларҙың тормошо тураһында тыңлайым. Интернет менән тормошомда бар һәм уға бер нисек тә күҙ йомоп булмай. Бөгөнгө йәштәрҙең аралашыу майҙаны ла интернет бит.

**Бөгөнгө башҡорт йәштәре донъяһында ниндәй үҙгәрештәр күрһегеҙ? Уларҙың ыңғай һәм кире яҡтарын баһалай алаһығыҙмы?**

**Йәдкәр Ҡунафин:** Бөгөн беҙгә күп нәмәне көсләп тағалар. "Белегеҙ, уҡығыҙ, тейешһегеҙ", тигән һайын кире тойғолар уяна, минеңсә. Мәҫәлән, илһөйәрлек, телһөйәрлек кеүек изге төшөнсәләр бала саҡтан, ғаиләлә үк һинең аңыңа һеңдерелгән булырға тейеш. Шунһыҙ, йәштәрҙе ҡуҙғытыу, ярһытыу ғына була был. Милли спорттың алға китеүен ыңғай күренеш тип һанайым, башҡорт йәштәренең йәштәр сәйәсәтендә күренә башлауы ла һәйбәттер, моғайын.

**Камилә Ҡыуатова:** Минә йәш йырсыларҙың бер төрлө, бер эстәлектә йырлауҙары оҡшап етмәй. Беҙҙең эстрадала үҫеш юҡ. Иҫ китеп тыңларлыҡ матур йырҙар, көйҙәр осрамай. Шулай уҡ йәштәр өсөн әҙәбиәт тә ярлы. Йәштәрҙең сәләмәт тормошҡа ынтылыуҙарын ыңғай күренеш тип баһалайым. Бөгөн сәләмәт булыу ысынлап та модала.

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** Бөгөн йәштәр интернетта ла, башҡа урындарҙа ла ҡыйыу рәүештә башҡортса һөйләшә ала, сығыштар яһай, видеороликтар яҙҙыра һ.б. Туған телде белеү һәм үҙ телеңдә аралаша алыу шулай уҡ модаға инде, тип әйтергә була. Был бик яҡшы күренеш. Кемдәрҙер "мода"нан артта ҡалмау өсөн булһа ла өйрәнә туған телен.

**Урал Заһиҙуллин:** Күптән түгел "Төнгө ултырыш"ҡа барғайным, артыҡ оҡшаманы. Боронғо йырҙарға заман ритмын өҫтәп сығарған рок-әҫәрҙәр бөгөн инде ялыҡ түгел. Ыңғайҙарҙан... Ҙур спортта башҡорт йәштәре күренә башланы, бигерәк тә бокс, грэпплинг кеүек көс алымлы спортта. Был күренеш йәштәрҙең спортҡа ылыҡыуын да, маҡсатлы булыуын да күрһәтә.

**Нимә ул дуҫлыҡ? Нимә ул мөхәббәт? Шул турала уйланғанығыҙ бармы?**

**Урал Заһиҙуллин:** Ысын дуҫлыҡ малайҙар араһында ғына булалыр, тип уйлайым. Ул шундай бер туғандарса бәйләнеш. Малайҙар дуҫлығы тарҡала

✓ *Башҡортса гәзит-журнал да күргән юҡ. Үҫкәндә шуларҙы уҡып, кеше булдыҡ. Үҙ ҡабырсағымда, үҙ соҡоромда йәшәп тик ятам икән. Оло донъя, етеш тормош шул була икән тип... Бына ҡайҙа ул соҡор. Күңелдә, зиһендә икән ул соҡор!*



һалып бармай, ул етди һәм тотороҡло. Ә ҡыҙҙар менән улай дуҫлашып булмай, улар тиҙ үпкәләп бара. Яратыу хисендә иһә туғанлыҡ, тиңлек тойғолары юҡ, унда яулап алыу күберәк өҫтөнлөк итә.

**Камилә Ҡыуатова:** Дуҫтарға бер-береһе менән ҡыҙыҡ, уларҙың уртаҡ эштәре, фекерҙәре бар, характерҙары тап килә. Ә күңелендә һөйөү тойғоһо тыуҙырған кешегә буласаҡ тормош юлдашың итеп ҡарайһыңдыр. Шуға ла ул бер генә кешегә ҡарата тыуалыр.

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** Минеңсә, дуҫлыҡ - ул мәңгелек, ә мөхәббәт мәңгелек була алмай. Әлбиттә, айырым өлгөләр бар, әммә күпселектә яратыу була ла юғала торған тойғо. Мөхәббәтте йәшәйештә яуаплылыҡ, хөрмәт, бәйлелек кеүек ауаздаш хистәр алмаштыра. Дуҫлыҡ өсөн айырым платформа кәрәк, ә яратыуҙың үҙенең бөтөнләй икенсе төрлө шарттары була.

**Йәдкәр Ҡунафин:** Ҡыҙҙар менән дә дуҫ булып була. Тик ул дуҫлыҡ "товарищество" формаһында. Һин дуҫ ҡыҙыңа барыбер малай дуҫыңа ҡараған кеүек ҡарай алмайһың, бер үк мөнәсәбәттә була алмайһың. Ул ҡыҙ кеше һәм шуның менән һине иректән яҙҙыра ла ҡуя. Минең ысын дуҫтарым егеттәр, улар менән беҙ һәр саҡ асыҡ, тура, аңлайышлы итеп аралашабыҙ.

Элек мин яратыу - ул химия йәки психофизиологик реакция ғына тип уйлай торғайным. Ә хәҙер икенсе төрлө икәнен беләм, тик әйтеп аңлата алмайым...

**Һиндә ниндәйҙер асыш яһаған, булмышыңды үҫтергән йәки үҙең остаз тип иҫәпләгән уҡытыусы кем ул?**

**Йәдкәр Ҡунафин:** Химия уҡытыусыһы Сафия Ташбулат ҡыҙы Бураншина. Ул бик белемле уҡытыусы, яҡшы итеп аңлата. Намыҫлы. Химияны ныҡ яҡшы белмәһәм дә, уҡытыусыны тыңлау, уның менән аралашыу оҡшай, шуға предметын да яратам.

**Камилә Ҡыуатова:** Мин тарих уҡытыусыһы Рәсих Батыр улы Зәйтүновтың дәрестәрен көтөп алам. Дәрестәрен күңелле, аңлайышлы итеп үткәрә белә. Беҙ дәрестәрҙә фекер алышабыҙ, бәхәсләшеп тә китәбеҙ. Ул бик күпте белә, күп уҡыған. Мауыҡтырғыс була дәрестәре. Ә былай гимназияла бөтә уҡытыусылар ҙа юғары кимәлдәге профессионалдар.

**Гөлназ Әхмәтйәнова:** Мин остазым итеп башҡорт теле уҡытыусым булған Айгөл Иршат ҡыҙы Игликованы иҫәпләйем. Ул минең һөнәр һайлауыма ла булышлыҡ итте. Уҡытыусым мине шәхес булараҡ та үҫтерҙе. Мин уның кешелек сифаттарына, белем биреүенә ғашиҡ булып, башҡорт теле уҡытыусыһы буласаҡмын, тигән һығымтаға килдем.

**Урал Заһиҙуллин:** Беҙҙә бөтә уҡытыусылар ҙа көслө, һәр береһе айырым хөрмәткә лайыҡ шәхес. Әммә башҡаларҙыҡы кеүек, минең дә күңелемә хуш килгән остазым бар. Ул информатика белгесе Әҡсән Зәки улы Зәйнуллин. Уҡытыусыбыҙ йәш кеше, ике йыл элек кенә институт тамамлап килде. Шулай булһа ла, ул ысын уҡытыусы. Информатиканы бик ҡыҙыҡлы итеп аңлата, төшөндөрә белә. Дәрес тамамланғанын һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеү тағы ла дауам итер ине әле, йәштәрҙең тағы ла күп нәмәләр хаҡында фекерҙәре бар ине, тик уларға дәрескә китер ваҡыт етте. Әммә ошо ваҡыт эсендә лә беҙ уларҙың төплө, аҡыллы, ҡыйыу йәш быуын икәнен төшөнөп өлгөрҙөк. Бына шундай балаларҙы тәрбиәләй илгә Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**




Мин кешеләр менән аралашмаһам... Үләсәкмен. Аңла мине, бисәкәй. Мин мужик, мин нимә әйтәм, тыңлап ҡына тор! Түргә атайым менән әсәйемде ултыртайыҡ. Шәкүр ағайым еңгә менән уң яҡты биләр. Әтеү, минең туғандарға бер ҙә хөрмәт күрһәткәнебеҙ юҡ. Бөгөн саҡырайыҡ, йәме. Һинең һалмаң шул тиклем тәмле бит ул. Ит һоғондорорбоҙ. Баҙарҙан үҙем майлы ғына түш итен һайлап алып ҡайтырмын. Ә һинең ҡойған ҡоймаҡтарың, бешергән ваҡ бәлештәрең телде йоторлоҡ. Һыйлайыҡ әле туғандарҙы, һыйлайыҡ, - ҡапыл тауышланып илап ебәрҙе ир. - Өҫтәлгә-ә, өҫтәлгә тултырылған тауығыңды сығарырға, зинһар, онотма инде. Йәлләмә-ә. - Тын алып, бысраҡ еңдәре менән күҙҙәрен һөрткөләне. - О-о, тултырылған тауыҡ, ҡаҙылыҡ, быуы бөркөп торған самауыр сәйе. Башым әйләнеп китте. Иҫән саҡтарында һыйлайыҡ, йәме. - Тағы тамағына төйөр килеп тығылды. - Иҫән саҡтарында һыйлайыҡ, тим. Иҫән саҡтарында бер-беребеҙҙең ҡәҙерен белеп, һыйлашайыҡ әле. Теге һыуытҡыс артындағы йәшниктә йәшереп кенә тотҡан тәмле емештәренде, йөҙөмөрөктәренде лә ҡуй. Әҙерәк кенә тоторбоҙ инде, улай уҡ тыйма әле, Әминә, артығын барыбер эсмәйем. - Ике бармағына "рюмка"ны эләктереп, ағаһы менән сәкәштереп алды. - Һаулыҡ өсөн, иҫәнлек өсөн тотайыҡ әле, туғандар. Башын артҡа ташлап, йәлп итеп "эсеп" ебәрҙе. - Минән бер тост. Ә нимә тип әйтергә икән һуң? Ә-һә, уйлап таптым. Бер ир ҡоҙоҡҡа ҡолап төшкән. Ҡоҙоҡта һыу булмаған. Ул бер көн ултырған, бер төн ултырған, ике көн ултырған, ике төн сыға алмай бынан, өсөнсө көн дә уны бер кем ҡотҡармай, өсөнсө төн дә һаман ул шунда интегә... Уның байлығы күп, хатта күп. Ҡунаҡ саҡырам тиһә, бар ауылды, бар туғандарын, бар дуҫтарын йыйып һыйлар байлығы бар уның. Тик ул ҡунаҡ саҡырмай. Ни эшләп? Сөнки ул соҡорҙа - шуға, сөнки ул сыға алмай. Юҡ шу-ул. Сөнки уның саҡырыр туғандары, дуҫтары юҡ. Юҡ! Нимә өсөн күтәрәйек, туғандар? Эйе, әйҙә, шул кеше соҡорҙа ҡалһын өсөн күтәрәйек! Ҡәбәхәт ул! Уға ер кәрәк. Бына һиңә ер, бер аршин ер. Был яҡҡа ла метр ярым, был яҡҡа ла метр ярым... Ҡәбәхәт ул! - Йөҙтүбән ятып, ҡоласын йәйеп соҡорҙоң киңлеген үлсәп алды. - Мин иҫерҙем инде, мин иҫерек. Ашап-эсеп ултырығыҙ әле, оялмағыҙ. Шәкүр ағайым минең, ҡәҙерлем минең, аша әле, аша, тормошта һис ҡәҙерең булмаһа ла, бөгөн булһа ла һыйланып, хөрмәт татып ултыр әле. Атайым, әсәйем бында, ана ҡалай беҙгә һөйөнөп ултырған булалар. Атайым ҡалай йәш. Әсәйем ҡартайҙы инде, бында сығып ултырырға хәл-кәр тапҡан әле. Әтеү ул эске бүлмәлә ятып ҡына тора ине. Балалар йыйылғанда сығып ултырайым, тигән булған. Әминә, мыжымай ғына әсәйемә сәй яһа әле. Ҡарағат япраҡтары, мәтрүшкә ҡушып яһа. Шәрифә һейҙеге менән эс таштырыуың етер, исмаһам, бөгөн ҡунаҡта рәхәтләнеп сәй эсһен. Ана, маңлайына тир бәреп сыҡты ҡәҙерлемдең. Сәй эсеп ултыр, әсәй. Атай, теге ятҡан йырыңды, "Буранбай"ҙы һуҙып ҡарамайһыңмы?..

Ир аптырап китте. Ҡолағына ысынлап та әкрен генә ҡурай моңо ишетелде. Атаһының тауышы ла яңғырап китте. Эйе, "Буранбай", әллә ни һуҙа алмаһа ла, ошо йырҙы йырларға яратты атаһы. Ир тултырып ҡаршы стенаға ҡараны. Өн менән уйҙары буталды. Моңға әүрәп, яйлап ойоп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Тамағы ла, күңеле лә туҡ ине шул. Тик оҙаҡ йоҡламаны.

- Ҡунаҡтар, һеҙ бындамы? Әйҙәгеҙ әле тағы берҙе! - Күҙен асты. - Һе, ҡайтҡандар икән. Хөрмәт итмәйҙәрме?

Нимә тип мине ҡәҙерләмәк кәрәк? Моя хата с краю, тип йәшәнем. Шәкүр ағайым түгел инде мин. Килмешәктәр ауылымда Әүлиә тауын эшкәртергә килгәндәр, бар ауылдаштарым ҡаршы сығып, шулар менән ҡан ҡойолғансы һуғышҡандар... Тауҙы һаҡлап ҡалғандар. Мин интернеттан был мәғлүмәтте уҡыным да, йәнем һыҙланы бер аҙ, әлбиттә, һуңынан... оноттом. Башҡорт телен яҡлап митинг булған. Интернеттан ҡараным да, йөрөйҙәр инде, тел бөтә буламы, тип тағы оноттом. Ә мин - һәйбәт ғаилә башлығы, етеш йәшәйем, эшемдә маҡтайҙар, күршеләр ярата, бик һәйбәт кеше ул, йәшәй белә Зөбәйер, тиҙәр. Бисә ҡыҙым менән вата-емерә русса һөйләшә, ҡот осҡос акцент менән, "мени ызваныт ни забуд" ти, фу, башҡорт теле кәрәкмәй һиңә, һин Мәскәүҙә уҡыясаҡһың, ти. Ә мин - ләммим. Әсәйем, үҙ телен онотмаһын бала, тип ыңғырашып ҡарай ҙа, уны ишеткән кеше юҡ. Башҡортса гәзит-журнал да күргән юҡ. Үҫкәндә шуларҙы уҡып, кеше булдыҡ та һуң. Үҙ ҡабырсағымда, үҙ соҡоромда йәшәп тик ятам икән дә баһа. Оло донъя, етеш тормош шул була икән тип... Бына ҡайҙа ул соҡор. Күңелдә, зиһендә икән ул соҡор!

Ҡапыл ҡыҙының тауышын ишеткәндәй булды.

- Атай, минең башҡортса йыр өйрәнгем килә. Атай, тим, мин бит башҡорт, папа, тим...

Ир һағайып китте.

- Сәриә?.. Ҡыҙым, һин ысынлап та бындамы әллә? - Өҫкә ҡарап алды. - Ҡыҙым. Ҡолағыма ишетелә башланы. Иҫәрләнеп кенә китмәһәм ярар ине лә.

Бер көн өләсәһе ейәнсәренә һорау бирә:

- Башҡорт теле бөтһә, нимә була, ҡыҙым?

Ир иҫәп-хисап менән ултыра ине. Эш араһында шым ғына тегеләргә ҡарап ала. Сәриә оҙаҡ уйланы. Шунан икеләнеп кенә:

- Башҡорттар бөтәме? - тип ҡуйҙы.

Шунан әсәһе, йылмайып: "Эйе, ҡыҙым, шуға башҡорт телендә һөйләшергә, башҡорт телендә уҡырға кәрәк. Әйҙә, башҡортса йырлайбыҙ, әкиәт һөйләйбеҙ", - тип рухланып китеп ейәнсәре менән өҫтәл артына ултырғайны, әлеге шул Әминәһе: "Юҡ-бар менән башын ҡатырма инде баланың, ҡәйнәм", - тип, Сәриәне икенсе бүлмәгә алып сығып китте. Шуны күреп-белеп торҙо ир, бер ни өндәшмәне. Эшенә сумған берәү. Әсәһе уға ҡараны, ниндәй һыҙланыу, ниндәй һағыш ине ул күҙҙәрҙә.

- Бына ҡайҙа соҡор, мин үҙемә күптән соҡор ҡаҙғанмын икән... - Ир ҡаҙаҡ менән ерҙе соҡорға тотондо. - Сығырға түгел, тәрәнерәк төшөргә кәрәк.

## Бишенсе төн

Көн менән төнө алышынды ирҙең. Уға хәҙер күктә янған ҡояш та, күҙ ҡыҫҡан йондоҙҙар ҙа ҡыҙыҡ түгел ине. Быялана барған күҙҙәр соҡорҙан башҡаны күрмәй ҙә инде. Хатта соҡорҙа ултырған икәнен дә онотоп китә ул.

Эт өргән тауышҡа уянды. Өҫкә баҡһа, ҡыҙыл шайыҡлы телдәрен һәлберәтеп, бер алабай тора. Ир уға оҙаҡ ҡарап ятты.

- Нисек хәлдәрең, му-ужик? - Эт шулай тип өндәшкәс, тертләп китте. Аяҡ-ҡулдарын көҙән йыйырған төҫлө булды хатта. Ҡуҙғалмай ғына:

- Кит бар бынан! Юғал күҙемдән, - тип өндәште.

- Үҙең юғал күҙемдән, йәме. - Эт арҡырылашты.

- Кешесә һөйләшә, сабаҡы. Кем өйрәткән тиң.

Һау-һау килеп эт өрөргә керешет.

- Ана шулай, атыу күрһәтермен үҙеңә! Эттең эт булғаны яҡшы, - тороп ултырҙы.

- Һау-һау, хәлең хөрт, мужик, - эт тағы ла өндәшкәс, ир ҡулын һелтәне.

- Кит әле бынан.

Эт өрҙө-өрҙө лә китте.

"Дә-ә, эттәр һөйләшә башланы. Бөтөнләй һантыйланып бөтмәҫ борон хушлашыу хаты яҙырға кәрәк. Тәүҙә әсәйгә яҙайым. Түшәктә ята ине. Үлеп кенә китмәһә ярар ине. Был арала юлға сыҡмай тор, тип үтенде бит инде. Тыңламаным. Мал артынан ҡыуа берәү. Ер эҙләй. Эй, әсәкәйем. Әжәлеңде көтә инең, һиңә тигән үлем улыңа килде бына. Был ҡайғыны нисек күтәрерһең инде, белмәйем".

Алдына һөйәк килеп төшкәс, ир тертләп китте. Уны тотоп әйләндереп, еҫкәп ҡараны. Шунан яларға тотондо, тешен батырҙы. Хатта өҫтә ҡойроғон болғап, өрөп маташҡан эткә лә иғтибар итмәне. Эт сыйылданы-сыйылданы ла китте.

- Һөйә-әк. Кәрәкмәй, мә, үҙеңә булһын. Бөткән әҙәм тип һанайһыңмы ни мине? Һөйәк ырғытырға... - һөйләнә-һөйләнә һөйәкте кимереүҙә булды үҙе. Ялтырап бөткән һөйәктә ит тә, ем дә юҡ икәнен ул тойманы ла. Нисектер башҡа тәм, башҡа танһыҡ еҫ уға ләззәт бирә ине. Тештәре ҡанағансы, хәле бөткәнсе ул шулай һөйәк менән эш итеүҙә булды. Тотоп ҡулдары талһа, ятып алдына ҡуйып мөйнәне.

"Ҡалай ауыр үҙе, ҡалай ҡаты. Әҙерәк майы ҡалған. Эттән дә ҡалыр икән. Нимә, туйып һикермәйһеңдер. Аҡыллы эт һөйәкте ҡара көнгә күмеп ҡуя, ә һин... Ә һин... Кеше һымаҡ... Кешеләр - эт һымаҡ. Ҡыҫҡаһы, үҙем дә аңламайым. Рәхмәт һиңә".

Шулай ҙа өҫтәге тере йәнде күреүе ысын булған икән.

- Эһе-һей! Кем бар унда? - ултырған килеш кенә өн бирреп ҡараны. Тыңлап торҙо. Бер ниндәй ҙә тауыш сыҡмағас, һөйәкте тотоп ҡараны. Ысынмы, йәнәһе.

"Бер сынаяҡ сәй ҙә булһа... Һыу алып кил әле, Казбек. Исемең нисек һинең? Аҡтүшме, әллә Рексмы. Будулайҙыр ул, ҡара сиғанға оҡшап тораһың әле. Барбосмы әллә? Әхмәт ҡарттың да эте шулай кеше һымаҡ аҡыллы ине".

**(Дауамы. Башы 11-16-сы һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



## ҺИГЕҘ СӘҒӘТ ЙОҠЛАҺАҢ...

■ "Сәләмәт ҡала" гәзите тәүлегенә 8 сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе, тип белдерә. Ғалимдар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлегенә өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы процесының боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ баланстың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Ғалимдар йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшеренеүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Ҡыҙғаныҫҡа күрә, барыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуыбыҙ менән маҡтана алмайбыҙ. Шулай ҙа аҙнаның биш көнө дауамында көнөнә бер тапҡыр ғына булһа ла йәшелсә ашайһығыҙ икән, һеҙ үҙегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был осраҡта организм шлактарҙан таҙара, тип белдерә Көньяҡ Корея ғалимдары. Сеулдағы Милли университетта үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, биш көнлөк йәшелсә диетаһынан һуң организмда зарарлы химик матдәләр күләме түбәнәйә. Йәшелсә ашау ярҙамында фталат һәм антибиотик матдәләрҙең күләмен дә түбәнәйтергә мөмкин.

■ Эрисман исемендәге Мәскәү гигиена ғилми-тикшеренеү институты белгестәре сүпте көн һайын түгеп, сүп биҙрәһен йышыраҡ йыуып торорға кәңәш итә. Был йортоғоҙҙо насар еҫтәрҙән, үңәҙ бәшмәктәренән, тараҡандарҙан ғына һаҡлап ҡалмаясаҡ, аллергияның ҡайһы бер төрҙәрен булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Аҙыҡ ҡалдыҡтары бүлмә температураһында ярты сәғәттән һуң серей башлай һәм бактериялар үрсеүенә яҡшы шарттар тыуҙырыла. Ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары азот һәм көкөрттән торған химик берләшмәләр барлыҡҡа килтерә, шуға ла уларҙан ауыр еҫ тарала. Саң һурҙырғысҡа йыйылған сүп-сарҙы ла аш-һыу биҙрәһенә ташлауҙан тыйылығыҙ, был осраҡта ундағы йорт талпандары, организм өсөн хәүефле башҡа микроогранизмдарҙан торған ваҡ ҡына саң бөртөктәре кире фатир буйлап тараласаҡ.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# БОРОНҒО АТАЙСАЛДЫҢ БӨГӨНГӨ ЗАҢЫ



**Иҫке Сибай ауылы мәҙәниәт йортона килеп инеү менән Сибай кантон ҡаршы ала! Эйе, үлемһеҙ йырҙар сығарған йырауսы, сәсән Шәйәхмәт Сибаевтың портреты эленеп тора бында. Тик сәсәндең ҡарашы ҡайҙалыр ситкә төбәлгән, "өс тин аҡса тапһам да файҙа, тип" донъя буйлап һибелгән тоҡомдаштарын күҙәтә мәллә ул?**

Иҫке Сибай - боронғо бөрйән ҡәүеменең атайсал ырыуы төйәге. Улар 18-се быуаттың баштарында хәҙерге Күгәрсен районындағы Оло Эйек йылғаһының уң ярынан, Санъяп (Биктимер) ауылынан күсеп килгән икән! Тәүге нигеҙ ҡороусы Сибай Тәнекәйев булған. Был хәтле ер аяғы ер башына тиктәҫтән генә күсенмәгәндер инде улар. Ауылдың тәүге исеме Атайсал (башҡорт ауылдары бик оҙаҡ үҙ ырыуҙары атамаһын онотторманған), ләкин 1798 йылдан Сибай тип йөрөтөлгән, ә 1850 йылдан Иҫке Сибай булып ҡалған. Ошо бер ауылдан ғына өс кантон начальнигы сыға: Аҡҡол Биктимеров, Абдрахман Аҡҡолов, Шәйәхмәт Сибаев. Данлы "Абдрахман", шанлы "Сибай", мөхәббәтле "Сәлимәкәй" йырҙарын ижад иткән атайсалдар йәшәй бында. Мин даукәр моң эйәһе Сөләймәнов Әһлей ағайҙы беләм, уның скрипка тартып уйнағанын тыңлар өсөн беҙ, БДУ студенттары, диалектология уҡытыусыбыҙ Нәғим ағай Ишбулатов менән махсус килеп киттек. Шул мәлдән алып мин башҡорт халыҡ сәнғәтен йәшәткән азаматтарҙы таныйым һәм хөрмәт итәм. Уларҙы бөтә донъяға беҙҙең милли мәҙәниәтте һәм сәнғәтте күрһәтеүсе илаһи талант эйәләре, тип һанайым.

-Хәйерле кис, мәртәбәле ҡунаҡтар килеп төштө, - тип һөйөнсөләне ауыл биләмәһе етәксеһе Сибай Утарбаев. - Баймаҡ, Өфө яҡтары нисек тын ала, төпкөл ауыл кешеһенә шул һәр ваҡыт ҡыҙыҡ. Мәғлүмәт, яҡшы хәбәрҙәр көтәбеҙ һеҙҙән!

Ауыл мәҙәниәт йорто ике ҡатлы, бик күптәнге бина, ләкин ғәмәлгә ярап ята: йылдан ашыу бында дәрестәр бара, сөнки ауылда мәктәп яңыртып төҙөлә икән. Ауыл биләмәһе етәкселеге, "Яҙгөл" фольклор ансамбленә йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙар ҡуҙғатҡан темаларҙы ҡолаҡ ҡарпайтып тыңлап ултырабыҙ, ошолайтып асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр ҡайһылай ҙа кәрәк беҙгә, тигән уй ҙа үтә баштан. Иҫке Сибайҙарҙың әйткәндәре тотош милләткә һабаҡ булыр ине. Уралтау ашып был хәтле ергә килгәс, уларҙың сәләмен алып ҡайтырға тейешбеҙ бит... Шулай итеп, тыңлайбыҙ:

"Ағинәй хәрәкәтенә ҡарата төрлө фекер булды һәм булырға тейеш тә, - тине атайсалдар. - Ағинәйлек күктән төшкән әкәмәт түгел. Ул кешегә Хоҙайҙан бирелә торған саф, ҡеүәтле, ирекле энергия. "Ағинәйлек" тигән төшөнсәгә хас, тип иҫәпләнгән матур сифаттар биш йәшлек ҡыҙ балала уҡ бар: белемгә, яҡшылыҡҡа, аҡылға ынтыла ул. Үҫмер ҡыҙ ҙа һылыулыҡҡа, матурлыҡҡа, сафлыҡҡа, мөхәббәткә ышана. Хатта ғәҙелһеҙлектәр, мәрхәмәтһеҙ мөнәсәбәт менән бәрелешкәндә лә, аҙғынлыҡ, эскелек һымаҡ яман хәлдәр уның бәхетенә аяҡ салһа ла, ҡатын-ҡыҙ йөрәгендә илаһи ут барыбер ҡала. Ҡатын-ҡыҙ ғүмер буйы ынтыла ул ағинәйлеккә..."

"Ағинәйлек һәр ҡатындың үҙенән, үҙенең усағынан башлана, үҙенең аҡыл самаһына, иманы ныҡлығына барып тоташа. Ләкин бөгөн ағинәй үҙ теләге менән ауылдың хәстәрен үҙ өҫтөнә ала. Ауыл тәртибе өсөн ҡайғыра, яуап бирә, ауылдың йәнен-йәмен ҡурсалай. Ни өсөн шулай? Бында хәҙис менән яуап бирәбеҙ: "Аллаһы Тәғәлә кемде яратмай? Тәкәбберҙе һәм монафиҡты. Тимәк, беҙ ауылдағы бер кемдә лә эшебеҙ булмайынса, төрлө ауыр хәлде күрмәмеш булып, тәкәбберләнеп йәшәй алмайбыҙ. Эскелектән йә тәрбиәһеҙлектән яфаланған ҡәрҙәштәрҙе ташлай алмайбыҙ. Монафиҡ - ул ике йөҙлө, тигәнде аңлата. Милли матбуғат кәрәк икәнен белеп тә уны алдырмау - ике йөҙлөлөк. Милли кейемде белеп тә уны киймәү, ауылда мәсет булһа ла унда йөрөмәү - ике йөҙлөлөк..."

"Ағинәй - тел тотҡаһы. Тарихты, тәртипте онотторға юл ҡуймаусы. 2013 йылдан ойоша "Яҙгөл" ансамбле, уның яртыһы - ағинәйҙәр. Эскелеккә ҡаршы көрәш иң баштан уҡ беҙҙең төп йүнәлеш булды, сөнки ошо афәтте йырып сыҡмайынса, кеше күҙенә ҡарарлыҡ түгел инек..."

"Ағинәйҙәрҙең эш асылын аңлаған етәкселәр уларҙың ярҙамына йәбешеп ята. Ҡайһы бер яҡта хатта артыҡ һалышып китәләр, ти. Экологик өмәләр, балалар менән сана шыуыу, ҡунаҡтар ҡаршылау... Һәр урында ағинәй кәрәк. Ошолай әүҙем, дәррәү итеп беҙ бит милләткә хеҙмәт итәбеҙ. Уның рухын һаҡлайбыҙ. Халыҡсан кейемдәрен, ризыҡтарын тергеҙәбеҙ һәм ҡулланабыҙ..."

"Ҡайсағында артыҡ тырышыу касафаты менән кейемдәрҙә һәм биҙәүестәрҙә хаталар барлыҡҡа килде. Шулай уҡ уларҙы тергеҙгәндә тарихи дөрөҫлөктө лә һаҡларға кәрәк. Милли хазиналарыбыҙҙы сит-яттарҙың үҙләште-

**✓ Шул хәтле айырылышыуҙар күп бит. Шуға ла беҙҙең ауылда 211 йәш ир йәшәй. Шул хәтле үк ҡыҙ-ҡырҡын ирҙән айырылып ҡайтып ултыра. Бергә ҡушһаң... Үҙе бер ауыл бит ул.**



реүе, урлашыуы кеүек күренештәр беҙҙә бик тетрәндерҙе, уятты, сәмләндерҙе. Беҙ бер кемгә лә үҙебеҙҙәкен бирмәҫкә, актив эшләргә, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең ярҙамсыһы булырға тейешбеҙ. Был хаҡта Башҡортостан мәҙәниәт министрлығы махсус хаттары ла таратылды райондарға. Бөгөн ауылдарҙа ағинәйҙәр төркөмдәре үҙҙәренә матур исемдәр ҡушып, фольклор төркөмдәре, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән бергә эшләп алып киттеләр..."

Ниһайәт, беҙ дүрт көҙ менән көтөп ултырған бер кеше, Разия Хизбулла ҡыҙы Баймөхәмәтова һүҙ ала: "Карт тип әйтмәгеҙ, миңә 82 генә йәш. 1961 йылда күрше генә ауыл - Йәнйегеттән килен булып төштөм. Иҫке Сибайҙың һуңғы алтмыш йыллыҡ тормошо күҙ алдымда, йөрәгемдә. Олоғайған һайын ауылыңды үтә күреп торһаң бит. Йәнде әрнеткән күренештәргә ҡаршы көрәшергә тип, мин дә ағинәйҙәргә ҡушылдым. Тик ағинәйҙең: "Әйҙәгеҙ, ана шулай эшләйек", - тигәненән генә бер эш тә барып сыҡмай икән ул. Ойоштора торған эшең, әйҙәләгәнең ошо баҫып торған еренә, ошондағы тормошҡа бәйле булһа, һинең һүҙең үтә, ғәмәлең аңлашыла, аңдарға барып етә. Шуға күрә, беҙ иң беренсе бер нәмәне аңларға тейешбеҙ: беҙ - башҡорттар, беҙ - ерле, тимәк, илле, телле, ашлы, йолалы халыҡ. Быны иҫтән сығарыу һис тә ярамай.

Мәсәлән, йола тураһында әйтәм. Минең туғандарым, уҡыусыларым күп бит инде. Шулар менән ошо Башҡортостандың ун дүрт районында туйҙа ҡатнашырға тура килде. Хәҙерге ваҡытта туйҙар нисек үтә? Бөтәһендә лә бер ҡалып. Киленде һыу юлын күрһәтергә алып барғанда, тиртунды әйләндереп кейеп, араҡы шешәһен баш осона күтәреп болғап, һын-сепрәк алыштырып, шағараҡ туй ҡоралар - былағайланалар. Юҡ, мәйтәм, былай булмай, йолаларыбыҙға йөҙ борайыҡ. Үҙебеҙҙең ата-бабаларҙан ҡалған бик мәғәнәле бер йола違 - "Һырға туйын" ҡалҡытайыҡ. Шул йола аша боронғо туйҙың нисек икәнен күрһәтәйек, тигән уй тынғы бирмәй китте. Нисек була ул һырға туйы? 1934 йылда ҡартайым Рәмзиә апайымды Иҫәнбәткә кейәүгә биргән. Уның нисек булғанын Байбулов тигән ағай һөйләне. Хәсән ауылынан ҡурайсылар саҡырылған. Хәсәндән Иҫәнбәткә еткәнсе юл буйында ҡурайсылар уйнап торған. Уртала ике яҡтан саҡырылған көрәшселәр бил һынашҡан. Ҡыҙ ағы еңһә, кәләште кәмөш йүгәнле атҡа атландырып, ауылға Бейбисә итеп оҙатып төшөрәләр. Әгәр ҡыҙ ағы еңелһә, килен Байбисә генә булып килә. Быңа, әллә күпме тамаша, әллә күпме уйын, йыр-бейеү менән үткәрерлек боронғо туй йолаһы. Йәш ғаиләнең көсөнә, ил алдындағы бурысына ниндәй ышаныс! Быйыл үткәрәйек әле шул йоланы, тип тәҡдим итәм ағинәйҙәргә лә, бигерәк тә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә. Шул хәтле айырылышыуҙар күп бит. Шуға ла беҙҙең ауылда 211 яңғыҙ ир йәшәй. Шул хәтле үк ҡыҙ-ҡырҡын ирҙән айырылып ҡайтып ултыра. Бергә ҡушһаң... Үҙе бер ауыл бит ул. Ә мәктәптәргә балалар кәрәк!

Тағы ла күңелемдә әрнеткәне шул: 1945 йылда мин 5 йәштә инем. Ауылға йөҙ етмеш "ҡара ҡағыҙ" килде, тинеләр. Бер көндө миңә мәктәп уҡыусылары ярҙамға килде. Мин уларҙан: "Балаҡайҙарым, Бөйөк Ватан һуғышы нимә ул?" - тип һорайым. Чечня, тиҙәр. Шаҡ ҡатмалы. Һуғыш ваҡытында тыуғандар хәҙер аҙылда бик аҙ ҡалдыҡ. Беҙҙең йәш быуынға һөйләр һүҙебеҙ бар, тик быны ойоштора кеше генә юҡ. Таңһылыу Сәләймәнова заманында "Тол ҡатындар иламай" тигән кисә үткәргәйне. Күптәр аталарының "ҡара ҡағыҙ"ҙарын алып килеп, халыҡҡа күрһәтте. Иламаған кеше ҡалманы. Батыр атайҙарыбыҙ арҡаһында йәшәйбеҙ, тип, бөтә ауыл менән Аллаһыға зекер әйттек...

Ә яныраҡ беҙҙең бөгөнгө мәҙәниәт йортоноң тамашаһын ҡараныҡ. Сәхнә мөйөшөндә бер бәләкәй генә өй эшләп ҡуйҙылар ҙа тотондолар ирҙәрҙән көләргә! Мыҫҡыллайҙар, билдән түбән дә төшөп китәләр! Нишләп бөгөн беҙ ирҙәрҙең дәрәжәһен төшөрәбеҙ? Шул арҡала ғаиләләр тарҡала. Әсә кеше бала тыуҙырыу менән бөйөк, әлбиттә. Әммә донъялыҡта ирҙәрҙең дәрәжәһен төшөрөү төптә дөрөҫ түгел, мин быны менән килешә алмайым. Ирҙәр - ирҙәр ул. Һүҙем шул: эш өсөн, кисәләр өсөн ошо ауыл темаһы, зары алынһын. Мәсәлән, "Абдрахман" тарихи йыры беҙҙә сыҡҡан, тип маҡтанабыҙ. Шөкөр, йырауысылар булған һәм бар бит! Ауылда бөгөн Мөрсәлим Кашанов йыр-көй, музыка яҙып ята, шул егеттә нишләп сәхнәгә саҡырып, ижадын тыңлап, дәрәжәһен күтәрмәҫкә? Ә күпме шағирҙар, йырсылар бар беҙҙең ауылда, беләһегеҙме, тип өндәшәм әле мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә. Ауыл халҡы менән бергә уйлап эш итергә кәрәк. Уй, фекер, зекер - өсәһе лә бер үк нәмә. Тәүҙә уйларға, шунан фекер итергә, шунан зекер әйтергә кәрәк. Эскелеккә ҡаршы бер батша ла, бер президент та сыға алмай, эскелекте ябай халыҡ үҙе бөтөрә. Эскелеккә ҡаршы эш алып барыу өсөн халыҡтың дини ҡанундары менән йәшәүе - төп шарт, тарихи шарт! Шуны онотмағыҙ!"

Бер арауыҡ өнһөҙ-телһеҙ ҡалып ултырҙы беҙҙең ҡор, бына ошолай төптән ҡайырып, тамырға һеңдереп әйтә-өйрәтә бит ул ағинәй. Бына шул хаҡҡый һүҙҙәренә зар булғанбыҙ түгелме?..

Иҫке Сибай ағинәйҙәре араһында йөрөүсе мәғариф ветераны Разия Баймөхәмәтова һүҙҙе дауам итте. Ул да бөтә ихласлығын һәм тәҡүәлеген һалып, Ҡөрьән сүрәләрен халыҡсан тел менән ябай итеп яҡташтары йөрәгенә һалыусы фиҙаҡәр йән. "Беҙ үҙебеҙҙең ата-баба нисек тотҡан, шулай тотабыҙ дингә. Ситтән килеп, икенсе йола тағып йөрөгәндәрҙе яҡын килтермәйбеҙ. - ти ул. - Мөхәммәт бәйғәмбәр һәм уның сәхәбәләре, Зәйнулла ишан һәм уның мөриттәре, Ғабдулла Сәйди һәм уның уҡыусылары тигән оло дини тәжрибә бар башҡортта. Ул - фани донъяны киң күңел менән ҡабул итеү, ә баҡыйлыҡҡа Ҡөрьән ҡушҡанса ғына әҙерләнеү. Мәсәлән, Яңы йыл байрамын үткәреү кәрәкмәй, тиҙәр, ләкин беҙ ошо йәмғиәт эсендә йәшәйбеҙ бит, бөтә ил байрам иткән был сағыу байрамды инҡар итә алмайбыҙ. Ул тиклем фанатизм, сиктән-сиккә һуғылыу - мәғәнәһеҙлек. Бары тик Яңы йыл байрамы эскелектән арынһын. Эсмәйенсә лә байрам итергә була. Тыныс һәм матур йылдар алмашыныуы, ғүмерҙең үтеүе хаҡында уйланырға, бер-береңде тәбрикләргә кәрәк. Замана йолаһы. Беҙ заман менән бергә, балалар һәм йәштәр менән бергә булырға тейеш. Хәҙистә лә әйтелә бит: "Һәр дәүерҙә Аллаһының көҙрәте менән төрлө эш ҡоралдары, тәгәрмәсле арбалар, яныса ашамлыҡтар, кейемдәр, дарыуҙар донъяға тулыр, улар уңайлыраҡ та булыр, һәм кеше файҙалы уңайлыҡтарҙан баш тартырға тейеш түгел..."

Ҡунаҡтар араһында Сибай ҡалаһы ағинәйҙәре лә бар ине. Иҫке Сибайҙа Фәниә Зәйнулла ҡыҙы Хәмитова бик ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр менән сығыш яһаны: "Ағинәй ни менән шөғөлләнә? Беҙ үҙебеҙ йәшәгән ауыл-ҡалалағы бер ниндәй саранан да ситтә ҡала, битараф була алмайбыҙ. Ҡайҙалыр низелер дөрөҫ эшләмәйҙәр икән, беҙ тураһын әйтеп төҙәтәбеҙ, аңлатабыҙ. Бөгөн иң ҙур эшебеҙ - балалар менән осрашыуҙар, саралар үткәреү. Мәктәптәргә йөрөп, "Уҡытыусы ҡаһарманлығы" тигән акция үткәрҙек, Бөйөк Ене өсөн ҡанын түккән, башын һалған уҡытыусыларын иҫкә төшөрҙөк. Балалар бик тулҡынланып, яратып ҡалды сығыштарыбыҙҙы. Уҡытыусыларға тәҡдимебеҙ шул булды: беҙҙә генә тыңлап ҡалмай, беҙ һөйләгән мәғлүмәттәрҙе ил һәм донъя картаһында күрһәтеп, әҙәби әҫәр геройҙарын ҡушып, лекцияларыбыҙҙы тулыландырһалар, нисек йәнләнеп китер ине осрашыуҙарыбыҙ, тинек..."

Ҡунаҡ аҙ ултыра, күп һынай. Ләкин атайсал тоҡомо һынатырлыҡ түгел. Уларҙағы уйҙар-тәҡдимдәр урғылып, әңгәмәбеҙ ҡаҙан кеүек ҡайнап китте. Бөтәһе берҙәм ҡул күтәреп, ошо Иҫке Сибай ауылының яңы баш ағинәйе итеп Илүзә Йосопованы һайланы. Ул махсус таныһтма алып, өр-яңы бүләк - француз яулыҡ ябынды. Ойошманы быға саҡ етәкләгән Рәйфә Айытҡолова ҙур рәхмәт әйттеләр, ауыл хакимиәте лә, ағинәйҙәр ҙа унан бик риза икәнен белдерҙе.

Атайсалда ағинәйҙәр ҡоро бара. Ир-егеттәр ҙә, ҡатындар ҙа бер уйниәттә: "Уянабыҙ, уйланабыҙ, эшләйбеҙ!"

Шундай фекер ҙә яңғырап китә: "Ағинәйҙәр күп булмай, тиҙәр. Бик дөрөҫ һүҙ. Ләкин бөгөн бөтә башҡорт ҡатын-ҡыҙы ағинәй сифаттарына эйә булырға ынтылырға бурыслы. Бурысты бөгөнгө урта һәм өлкән быуын атҡарырға тейешбеҙ, сөнки беҙ академик совет мәктәбен үттек. Халҡыбыҙ быуаттар буйы ынтылған донъяуи ғилемде алдыҡ. Тик ҡот осҡос ғәҙелһеҙлек шунда булды: беҙҙе дини белемдән ситләттеләр, шуға бөгөн дин яғынан шыр наҙанбыҙ. Әммә! Хоҙаның хикмәте! Ислам дине ҡанундары халҡыбыҙҙың йолаларына, холҡ-фиғеленә, милли характерына һеңгән. Аллаһы Тәғәлә фатиха биргән әҙәми сифаттар беҙҙең тәрбиәлә, телдә, фольклорҙа, көнкүрештә һаҡланған. Тимәк, яуаплы һәм ижади ҡарап, уларҙы тергеҙеү генә кәрәк..."

...Кинәт ҡолағыма моңло скрипка сыңы бәрелде. Гүйә, Әһлетдин Фазлетдин улы Сәләймәновтың йәне... тауыш бирҙе. Ул риза, көнәрәт булып, бөгөнгө ҡыҙыу һөйләшеүгә, бәхәстәргә, теләктәргә ҡушылыр ине. Ауылым, халҡым, илем, тип янған иҫ киткес матур кеше ине бит ул! Ысын атайсал бөрйәне, атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, ғүмер буйына балалар менән эшләгән, мәҙәни ағартыу эштәрен алып барған. Иҫке Сибай ауылындағы музыкаль мәктәпте булдырыусы беренсе директор, шуға күрә мәктәп уның исемен йөрөтә. Скрипкаһын ҡулынан төшөрмәй, бер туҡтауһыҙ эшләп тик йөрөгән ул. Яҡташтары шулай хәтерләй...

Иҫке Сибай... Бик мәшһүр төбәк икәнеңде беләме икән һиңдә йәшәгәндәр? Сибай кантон нимә тип уйлай икән һинең ике йөҙҙән ашыу буйҙаҡтарың, тол ирҙәрең һәм ҡатындарың, тыумаған балаларың, йырланмаған йырҙарың тураһында? Әллә шуларҙы белә булғанға ла... һүрәтеңдә донъяға тура ҡарарға ҡыймай ултыраһыңмы икән?..

**Сәрүәр СУРИНА.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ВАҠЫТТЫҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛ

Һин ваҡытың күберәк булыуын теләйһең, ләкин низән башларға белмәйһең. Иртәрәк тороп ҡара. Был тәүге аҙым һинең эш көнөнә - бер-ике сәғәт, ғүмереңә тотош йылдар өҫтәр. Күптән йыйынған эшең менән иртәнге ашҡа тиклем буш ваҡытында шөғөлләң. Ниндәйҙер өлкәлә эрудит булырға теләйһеңме? Һәр иртә һайын ошо предметты өйрәнеүгә ярты сәғәт бүл, аҡрынлап тәрән белемгә эйә булырһың.

Әгәр һин быға тиклем сит телде өйрәнеүгә тотонмаған булһаң, бына хәҙер, ошо минуттан тотона алаһың. Башларға бер ваҡытта ла һуң түгел. Ваҡыт беҙҙе сикләмәй. Беҙ үҙ-үҙебеҙгә сик ҡуябыҙ.

Әгәр эшләнмәй ҡалған эште эшләп ҡуйырға тәүәккәлләһәң, күп нәмәлә уңышҡа өлгәшә алырһың. Күп кешеләр "һуңынан" теорияһы буйынса йәшәй. Уларҙың пландары ҙур. Улар бөйөк эштәрҙе һуңынанға ҡалдыра, балалары үҫә төшкәс, эшен алмаштырғас, бала-сағаһы мәктәпте тамамлағас башҡарырға йыйына. Был "һуңынан" бер ваҡытта ла килеп етмәй, әммә улар бер көн килеп теләгәндәренә өлгәшер, тип ышаныуҙы дауам итә.

Теләгәнеңде тот та хәҙер үк эшлә, бик булмаһа, кисектермәй, планын төҙөп ҡуй. Зиһенеңдә хәҙер үк программалаштыр. Иртәгә түгел, хәҙер үк! Бөгөндән башҡа бер ҡасан да ваҡытың булмаясаҡ.

Мажаралар рухы кисер. Киләһе йылда паркка бар, тауға күтәрел. Һауа торошона иғтибар итмә! Тор ҙа юлға сыҡ!

Хыяллан. Билет һатып алыу, сумаҙаныңды әҙерләү хаҡында уйла. Өйҙән сығып китеүең, көндәлек ығы-зығынан ҡасыуың тураһында хыялла. Хатта сәйәхәтең ҡыҫҡа ваҡытлы булһа ла, "Мин киләһе аҙнала юлға сығам" тип кинәнеп ҡысҡырып әйт.

Сит илгә барып ҡайтырға теләйһеңме? Иң мөһиме - ваҡытыңды юғалтма. План төҙө лә ҡуҙғал. Икеләнеп ҡалма.

Тойғо - ул ышанысҡа аҫҡыс. Әлеге мәлдә той, күнегелгән сиктәрҙе емереп, ирекkә сығырға ваҡыт етеүен той. Ышанысың теләгеңде тормошҡа ашырырҙай ҡеүәтле эске көсөңдө хәрәкәткә килтерәсәк. Теләгәнең тураһында уйлағанда ни тиклем ҙурыраҡ ҡыуаныс кисерһәң, ул шул тиклем тиҙерәк тормошҡа ашасаҡ.

Донъяла арыған, йонсоған кешеләр бик күп. Уларға күңелһеҙ. Улар ни эшләргә белмәй. Ваҡыт үтһен өсөн генә эскелек менән шөғөлләнә, бәйләй, ләстит һата. Ваҡытты бушҡа үткәреп, улар үҙҙәренең ижади һәләтен һәләк итә. Уларҙың уҡыуға, медитацияға йәки үҙ-үҙен камиллаштырыуға ваҡыттары юҡ. Ә йәшәү - ул хәрәкәт. Хәрәкәтһеҙлек - ул үлем. Сәғәт уҡтары алға бара. Һинең ваҡытың бына әле еткән. Хоҙай тарафынан бирелгән ваҡытты файҙалан. Юҡһа, күптәр, ғүмере аҙағына яҡынлашмайынса, ваҡыт ҡәҙерен белмәй. Ваҡыт тойғоң ни тиклем үҫешкән булһа, үҙ-үҙеңә ышанысың шул тиклем көслөрәк буласаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 26 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Победа!" [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00 Брифинг в прямом эфире. Паводок в Башкортостане: актуальная информация.**
**9.45 Сәләм, Республика!**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Виолетта из Атамановки". [12+]**
**1.45 Автограф. [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Красный Паша". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 27 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Победа!" [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 "101 вопрос взрослому". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00 Брифинг в прямом эфире. Паводок в Башкортостане: актуальная информация.**
**9.45 Сәләм, Республика! [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Бәхетнамә.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Дорога к храму". [0+]**
**14.00 Счастливый час.**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Виолетта из Атамановки". [12+]**
**1.45 Башкорттар. [6+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]**
**5.00 Историческая среда. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 28 АПРЕЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Победа!" [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Наркотики Третьего рейха". [18+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00 Брифинг в прямом эфире. Паводок в Башкортостане: актуальная информация.**
**9.45 Сәләм, Республика! [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Спортивная история. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Гражданка Катерина". [12+]**
**1.45 "Бай". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Сваха". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 29 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Победа!" [12+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Планета Земля. Увидимся завтра". [0+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00 Брифинг в прямом эфире. Паводок в Башкортостане: актуальная информация.**
**9.45 Сәләм, Республика! [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Берешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 "Йырлы донъя Нурбостан". Концерт детского телеканала "Тамыр". [0+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Байык" представляет... [12+]**
**1.00 Х/ф "Гражданка Катерина".[12+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!" [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 30 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.55 Жить здорово! [16+]
10.55, 3.25 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 4.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.55 Мужское / Женское. [16+]
17.00 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Поле чудес. [16+]
20.00 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
22.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.30 "Голос. Дети". Финал. [0+]
1.40 Д/ф "История джаз-клуба Ронни Скотта". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00 Брифинг в прямом эфире. Паводок в Башкортостане: актуальная информация.**
**9.45 Сәләм, Республика! [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.15, 5.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 3.30 "Дочь Агидели". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/с "Легенды космоса". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "Память сердца". [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Ялкар". [12+]**
**0.00 Х/ф "Везет же людям". [12+]**
**1.30 Спектакль "Любовница". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 1 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Святая Матрона. "Приходите ко мне, как к живой". [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.55, 16.25 Д/с "Крещение Руси". [12+]
15.00 Схождение Благодатного огня. Прямая трансляция из Иерусалима.
18.00 Д/с "Романовы". [12+]
21.00 Время.
21.20 "Голос. Дети". Финал. [0+]
23.25 Х/ф "Неоконченная повесть". [6+]
1.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.
4.15 Х/ф "Человек родился". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45, 6.15 История одного села. [12+]**
**9.00 Кустәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Взлетай! " Репортаж с Третьего форума школьного образования. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсык". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Автограф. [12+]**
**12.00 Үткән гүмер. [12+]**
**12.30 Колесо времени. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Кармак-шоу". Концерт. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30, 22.00 "Яңы моң". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.30 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 Д/ф "Апостол Камчатки". [12+]**
**23.45 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы г.Уфы.**
**3.00 Х/ф "Синдром Феникса". [16+]**
**4.45 Спектакль "Журавлиная песнь". [12+]**

## 2 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.45, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.35 Х/ф "Неоконченная повесть". [6+]
8.10 Х/ф "Укротительница тигров".
10.10 Жизнь других. [12+]
11.05, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.50 Д/с "Романовы". [12+]
17.55 Юбилейный концерт Надежды Бабкиной. [12+]
19.25 Премьера. "Лучше всех!" [0+]
21.00 Время.
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.05 Х/ф Премьера. "Загадка Анри Пика". [16+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Берешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.45 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Концерт Екатерины Ямщиковой. [12+]**
**18.15 Полезные новости. [12+]**
**18.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.15 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Синдром Феникса". [16+]**
**2.00 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**4.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**


**ПРОВОДИТСЯ НАБОР ОХРАННИКОВ**

Районы работы: **ДЕМСКИЙ, ЦЕНТР, ЗЕЛЕНАЯ РОЩА**
График работы - сутки через двое
**Заработная плата от 18 000 тыс. руб.**
Телефон: **8 (937) 475-16-75**


## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 апрель "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+
**29 апрель "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәнһүҙин), комедия. 16+
**30 апрель "Һөйәркә"** (Т. Миннуллин), драма. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 апрель "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим). 15.00, 19.00 6+
**28, 29 апрель "Үлмәсбай"** (М. Кәрим), үлемһеҙлек хаҡында хикәйәт. 12.00, 19.00 12+
**30 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), комедия. 12+
**2 май "Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 12.00 6+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 18.00 14+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 май "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+
**1, 2, 3 май "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 16.00 0+
**2 май "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 апрелдә** - Стәрлебашта, **28 апрелдә** - Ишембайҙа **"Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+
**29 апрель "Ҡыҙын алдым ҡосаҡҡа"** (Б. Аппаев), комедия. 16+
**30 апрель "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 апрель БР Милли симфоник оркестр** концерты. 6+
**29 апрель "Күңел наҙҙарына илтһен бейеү"** филармонияның XXX концерт миҙгелен ябыу. 6+

### Сибай театр-концерт берекмәһе

**29 апрель** Сибай драма театры залында **"Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле** концерты. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (14) дүшәмбе | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 27 (15) шишәмбе | 4:17 | 5:47 | 13:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 28 (16) шаршамбы | 4:15 | 5:45 | 13:30 | 19:13 | 20:43 | 22:13 |
| 29 (17) кесе йома | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 19:15 | 20:45 | 22:15 |
| 30 (18) йома | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 19:16 | 20:46 | 22:16 |
| 1 (19) шәмбе | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 19:18 | 20:48 | 22:18 |
| 2 (20) йәкшәмбе | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 19:20 | 20:50 | 22:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 22 АПРЕЛЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ЕР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**15-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Уҡлау. Сарафан. Азькышет. Сабата. Комик. Атев. Кимоно. Әрме. Оле. Фәнил. Сари. Екке. Кеҫә. Атари. Итек. Тухъя. Үпкә. Коба. Етмеш. Ханбок. Әләм.

**Вертикаль буйынса:** Кокошник. Алмиҙеү. Калфак. Смак. Папаха. Ыҙан. Ҡыртыш. Әтәсе. Әле. Түбә. Тувыр. Хром. Узала. Елкә. Сәукеле. Ярыш. Ситек. Арго. Агрофизика.

БАҠСАСЫ КӘҢӘШЕ

# ПОМИДОР ТӘРБИӘ ЯРАТА



**Мин йыл һайын помидорҙы февраль аҙаҡтарында сәсәм. Ни тиклем иртәрәк ултыртһаң, шул тиклем тиҙерәк өлгөрә, тиһәләр ҙә, помидор барыбер июль аҙаҡтарына ғына ҡыҙара ул.**

Помидорҙан мул уңыш алыу сере менән уртаҡлашыуымды һорап, йыш мөрәжәғәт итәләр. Мин уларға, үҫентеләрҙе һыу, яҡтылыҡ, ашлама менән генә түгел, ә матур мөнәсәбәт, күтәренке күңелегеҙ менән дә тәрбиәләргә кәрәк, тип әйтәм. Эйе, кәрәккәнсә дымы ла, яҡтылығы ла булырға тейеш. Үҫенте оҙонайа башлаһа, осон киҫәм. Әммә уның да үҙ тәртибе, самаһы бар: мин үҫентене аҫта өс япраҡ ҡалырлыҡ итеп ҡырҡам. Шулай иткәндә, ул буйға түгел, ә ботаҡ ебәреп, тармаҡланып үҫә.

Мин байтаҡ йылдар инде бер төрлө генә йәшелсә орлоҡтары сәсәм. "Малиновый гигант", "Мастер Гарден", "Красный великан", "Любительский розовый", "Купец-молодец" кеүек ҙур, ҡыҙыл помидорҙарҙы яратам. Йыл һайын үҙемдең йәшелсәнән орлоҡ алып ҡалам. Йыш ҡына һатып алынған орлоҡтоң күп өлөшө буш була. Шуға күрә, үҙемдекеләргә өҫтөнлөк бирәм. Шулай ҙа уларҙы сәсер алдынан тоҙло һыуға һалып, бушмы-түгелме икәнен тикшерәм. Ҡалдырған орлоҡтарым һәр ваҡыт магазиндыҡына ҡарағанда сифатлы булып сыға. Әммә тоҙло һыуҙан алғас, таҙа һыу менән сайҡарға кәрәк.

Бөгөн, әлбиттә, орлоҡ сәсеү, уны төрлө ауырыуҙарға ҡаршы эшкәртеү тураһында һөйләү һуң инде. Уңған баҡсасылар хәҙер үҫентеһен әллә нисә тапҡыр күсереп ултыртҡандыр. Мин үҙем үрсетмә 7-9 сантиметрға етһә, яртылаш тупраҡ һалынған ҙурыраҡ һауытҡа күсерәм. Үҫкән ваҡытта унда аҙлап ҡына тупраҡ өҫтәргә була. Аҙна-ун көнгә бер тапҡыр органик ашлама менән туҡландырырға ла онотмайбыҙ. Үҫенте 30-40 сантиметр бейеклеккә еткәс, көслө тамырлы булһын өсөн уны тағы ла ҙурыраҡ һауытҡа күсереп ултыртырға кәрәк. Минең теплица булғас, һуңғы йылдарҙа һауытҡа күсереп тормайым.

Үҫенте шытып сығыуға, яҡты көн ваҡытын мөмкин тиклем оҙайтырға кәрәк. Ысын япрағы сыҡҡансы, 16 сәғәткә тиклем яҡтылыҡ булдырығыҙ. Унан һуң яҡтылыҡ 14 сәғәттән артмаһын, улар ҙа ял итергә тейеш.

Үҫентеләргә һыуҙы күп һибергә ярамай. Төбөнә һыу йыйылып тороу, артыҡ дым тамырҙар сереү, бәшмәк ауырыуҙары ҡурҡынысын тыуҙыра. Һыу бүлмә температураһында булырға тейеш. Помидор үҫенте булып, тәҙрә төбөндә 60 көн ултырһа - һәйбәт. Шытып сыҡҡан көнөнән 65-70 көндө иҫәпләһәң, сәсеү көнөн дә билдәләргә мөмкин. Был ваҡытҡа уның япрағы 7-8, ә оҙонлоғо яҡынса 20-25 булһа, был үҫентене яҡшы тип һанайым.

Кәңәшем йәш баҡсасыларға файҙалы булһа, бик шат булыр инем.

**Гүзәл ЗАҺИҘУЛЛИНА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТӘРӘҮИХ НАМАҘЫ



**"Тәрәүих" - ял итеп алыу өсөн бер аҙ ултырып тороу тигәнде аңлата. Был - Рамаҙан айында, уның тәүге көнөнән башлап, йәстү намаҙынан һуң, йәмәғәт менән уҡыла торған нәфел намаҙы.**

Бер ваҡыт Рамаҙан айының бер төнөндә Бәйғәмбәребеҙ мәсеттә намаҙ уҡып ала, уның менән бергә мәсеттә булған кешеләр ҙә уҡый һәм иртән был турала башҡаларға ла һөйләй. Икенсе кистә мәсеткә халыҡ күберәк йыйыла, намаҙ уҡырға килеүсе халыҡ һаны көндән-көн арта. Дүртенсе кистә Бәйғәмбәр үҙе мәсеткә сыҡмай, иртәнге намаҙға ғына килә һәм уҡып бөтөү менән халыҡҡа боролоп, Аллаһҡа зекер-тәсбихтәр әйткәндән һуң: "Кисә мин һеҙҙең мәсеткә йыйылып килгәнегеҙҙе белдем, әммә артабан был намаҙ фарызға әйләнер ҙә, һеҙ уны үтәй алмай башларһығыҙ, кәмселектәргә юл ҡуйылыр тип ҡурҡтым. Тәрәүих намаҙҙарын өйҙәрегеҙҙә генә уҡығыҙ!" - тип белдерә.

Бәйғәмбәребеҙҙең намаҙҙы өс төн рәттән йәмәғәт менән бергә уҡығаны билдәле, ләкин нисә рәҡәғәт итеп уҡығаны билдәһеҙ. Шуға ла берәүҙәр уның рәҡәғәттәр һанын һигеҙ, икенселәр ун икегә, хатта егермегә еткереп уҡыған. Тағы ла Әбү Бәкер заманында тәрәүих намаҙҙарын халыҡ өйҙә генә уҡый. Әммә тәрәүих оҙон бер намаҙ булғанлыҡтан, уны йәмәғәт менән мәсеттә уҡыуҙың еңелерәк булыуын аңлайҙар. Бер кисәлә Ғүмәр ибн әл-Хаттаб бәйғәмбәребеҙ мәсетендә тәрәүих намаҙын берәүҙәрҙең яңғыҙ ғына, икенселәрҙең йәмәғәт менән уҡығанын күреп, Үбәй ибн Ҡәғбкә имам булып, был намаҙҙы егерме рәҡәғәт итеп уҡырға бойора. Был бойороуҙың сөннәткә мыуафиҡ булыуын Ғәйшә анабыҙ ҙа, Ғосман, Ғәли, Ғабдуллаһ ибн Мәсғүт, Ғабдуллаһ бин Ғүмәр, Ғабдуллаһ ибн Ғаббас кеүек бөйөк сәхәбәләр ҙә таный.

Тәрәүих намаҙының айырым бер үҙенсәлеге бар: һәр рәҡәғәттә унда "Фатиха" сүрәһенән һуң сиратлап "Саффәт" - "Сафта тороусылар" сүрәһенән Нух менән Ибраһим ғәләйһис-сәләм, Муса менән Һаарун, Ильяс бәйғәмбәрҙәр тураһында хөрмәт менән иҫкә алынған аяттары уҡыла. Аллаһы Тәғәлә һәр ҡәүемгә, һәр ҡәүемдең остазы булған бәйғәмбәрҙәргә, ата-бабалар тормошон дауам итеп килгән һәр быуынға сәләм ебәреп һәм сәләмләшеп кенә йәшәргә бойороп, тынғылыҡ теләп тора.

*✓ Үҙенең күңел ихтыяжына тап килгән шарттарҙа йәшәүсе кеше, әлбиттә, бәхетле, әммә үҙ ихтыяжын теләһә ниндәй шарттарға яраҡлаштыра белгәндәр тағы ла бәхетлерәк. (Дэвид Юм).*



СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.

# ӨФӨЛӘР БЕЙЕНЕ...

**Милли кейем көнөндә баш ҡалала бик күп саралар ойошторолдо һәм шул иҫәптән интернет киңлектәрендә төрлө акциялар, флешмобтар үтте. Байрам Салауат Юлаев майҙанында "Ритайым Party - "пятачок" концерты менән тамамланды.**



Концертҡа өфөләрҙең байтаҡ өлөшө милли кейемдәрҙә килде. Өс йөҙгә яҡын ҡатнашыусы араһында урыҫ, башҡорт, татар, удмурт, мари һәм башҡа милләт вәкилдәре бар ине. Улар өсөн сәхнәлә Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисы Эльвира Муллағолова, "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының "Аҡйондоҙ" халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Өфө сәнғәт училищеһының ҡурайсылар ансамбле һәм башҡа ижади коллективтар, йырсылар сығыш яһаны. Бынан тыш, байрам барышында "Аманат" халыҡ бейеүҙәре йәштәр ансамбле бейеүселәре барлыҡ теләүселәргә башҡорт бейеүен өйрәтте, "Аҡйондоҙ" ансамбле етәксеһе Рәис Низаметдинов әйлән-бәйлән уйынын ойоштороҙо. Иң актив тамашасыларға Республика халыҡ ижады үҙәге ҡурай, бейеү, йыр буйынса оҫталыҡ дәрестәре яҙҙырылған флешкалар, "Тамға" проектының сағыу календарҙарын өләште. "Байрам саралары бының менән генә сикләнмәй, артабан да дауам итә һәм унда театрҙар, концерт ойошмаларының ижади коллективтары ҡатнашасаҡ. Йәй айҙарында "Ритайым" Өфөлә Ағиҙелдең төҙөкләндерелгән яры буйында аҙна һайын үткәрелә, ә Милли кейемдәр парады июль айы башында "Фольклориада йөрәге" фестивале сиктәрендә уҙғарыласаҡ", - тине Республика халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары Нәфисә Тулыбаева. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Милли кейем көнө 2020 йылдан алып Башҡортостан Башлығы Указына ярашлы йыл һайын ике тапҡыр: апрелдең өсөнсө йомаһында һәм сентябрҙең икенсе шишәмбеһендә билдәләнә.

# ЙӘШ ӘҘИПТӘР ҠАЙҘА?

**Өфөлә башҡорт телендә шиғырҙар, проза әҫәрҙәре яҙған йәш әҙиптәр өсөн "Йондоҙҙарҙай күреп, мин күҙҙәргә ҡарап барамын..." конкурсы башланды. Конкурсты ойоштороусылар - Мостай Кәрим исемендәге фонд һәм "Шоңҡар" журналы.**

Мостай Кәрим исемендәге фонд директоры Әлфиә Кәримова һөйҙәренсә, Фонд башҡорт телен һаҡлауға һәм үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән һәләтле йәштәргә һәр яҡлап ярҙам күрһәтә. Башҡорт дәүләт университетында Мостай Кәрим исемендәге Ижади оҫтахана - Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү үҙәге эшләй. Йыл һайын Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим тамамлаған Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәтте өйрәнеү һәм журналистика факультетының иң яҡшы студенттарына һәм аспиранттарына Фондтың стипендияһы бирелә, октябрҙә Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының яҡшы өлгәшкән уҡыусыларын ҡотлау ойоштороло.

- Әлфиә Мостай ҡыҙы һәм Фонд хеҙмәткәрҙәре менән бер әңгәмәлә "Йондоҙҙарҙай күреп, мин күҙҙәргә ҡарап барамын..." конкурсын үткәреү идеяһы тыуҙы ла инде. Декабрҙә, эштәргә йомғаҡ яһалғас, башҡорт әҙәбиәтендә йәш шағирҙар һәм яҙыусыларҙың яңы исемдәре асылыр, тип ышанабыҙ, - ти "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Айгиз Баймөхәмәтов. - Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәләтле уҡыусылар, өлкәндәр тормошона аяҡ баҫҡас, әҙәбиәт менән шөғөлләнергә теләмәй. Беҙҙең бурыс - башҡорт әҙәбиәтен үҫтереү, уларҙың үҙҙәренә ышанысын нығытыу һәм ижади офоҡтарын киңәйтеү.

# ЭЛЬБРУСҠА АРТЫЛДЫ...

**Казарма емерелгәндә аяҡһыҙ ҡалған Өфө спортсыһы һәм блогер Рөстәм Нәбиев тураһында документаль фильмды Эльбруста төшөрәләр. Экспедиция быйыл яҙғыһын планлаштырыла.**

Фильмды төшөрөү менән Ә.Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы ярҙамында Мәскәүҙең "Дока" компанияһы шөғөлләнә. "Башинформ" фильмдың продюсеры Лариса Олейникка мөрәжәғәт итте. "Рөстәм - үҙенсәлекле, ҡыйыу кеше. Мин уның тормошон күҙәтеп барҙым, уның өлгөһө илһамландыра, шуға уның тураһында һөйләргә теләнем. Рөстәм менән Zoom аша һәм Өфөгә килгәс аралаштым. Уның хаҡында инвалид булараҡ түгел, ә кеше, спортсы, альпинист булараҡ һөйләге килә. Һаулыҡ мөмкинлеге сикләнһә лә, ул кешеләр менән таныша, донъяның сиктәрен киңәйтә", - тине Лариса Олейник. Ярты сәғәтлек фильмды быйыл төшөрөп бөтөү планлаштырыла.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 сентябрендә Рөстәм Нәбиев тарихта тәүге тапҡыр Эльбрусты ҡулдарында яуланы (6 220 метр). Ул 15 сәғәт буйына тауға артылды, 13 саҡрым юл үтте.

# ТАҒЫ БЕР ЕҢЕҮ!

**Айнур Аҫҡаровтың "Өс таған" фильмы "Ҡырым кадры" Бөтә Рәсәй этнографик фильмдар фестивалендә иң яҡшы тулы метражлы уйын фильмы тип танылды.**

Фестиваль 26-28 мартта Симферополдә уҙҙы. Быйыл фестиваль этнография темаһына арналғайны. Конкурс программаһында Рәсәйҙең 15 төбәгенән 35 эш ҡатнашты. Актер, сценарист, режиссер Михаил Богдасаров башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең повесы буйынса төшөрөлгән фильмды юғары баһаланы. Ойоштороусылар әйтеүенсә, бүләк жюриҙың бер тауыштан ҡабул ителгән ҡарары менән "Өс таған" картинаһына тапшырылған. Фестивалде 2018 йылдан Ҡырым Республикаһының Милләт-ара мөнәсәбәттәр эштәре буйынса дәүләт комитеты булышлығында "Одиссей" фән, мәҙәниәт һәм кино үҫешенә ярҙам фонды уҙғара.

# ОТКРЫТКА ҺАТЫП АЛ!



**Почта әйләнешенә Милли кейем көнөнә арналған открыткалар сыҡты. Тематик серия өс открытканан тора, уларҙа көньяҡ башҡорттары ҡатын-ҡыҙҙарының байрам кейеме, йорт старшинаһы кейеме һәм Ҡурған башҡорттары ҡатын-ҡыҙҙарының байрам кейеме төшөрөлгән.**

Открыткаларҙы республиканың Мәҙәниәт министрлығы менән берлектә Башҡортостан Республикаһының Федераль почта элемтәһе идаралығы сығара башланы. Уларҙың рәсемле яғын башҡорт һәм рус телдәрендәге яҙыуҙар биҙәй, стандарт почта маркаһы ла бар. Башҡорт милли тематикаһына арналған почта продукцияһын элек тә күрергә мөмкин ине. 1933 йылда "СССР халыҡтары" серияһында тирмә һәм аттар янында милли кейемдәге башҡорттар төшөрөлгән марка почта әйләнешенә сығарылды. Шул ваҡыттан алып йөҙ тапҡырҙан ашыу Башҡортостандың күренекле шәхестәренә, уның тарихына, тәбиғәтенә һәм административ ҡоролошона бағышланған конверттар, маркалар, открыткалар донъя күрҙе. Башҡортостан Республикаһының Федераль почта элемтәһе идаралығы директоры Ирек Ғәлимов һөйҙәренсә, башҡорт милли костюмы төшөрөлгән открыткалар коллекционерҙар һәм посткроссерҙар өсөн мөһим әһәмиәткә эйә: "Открыткалар менән алмашыу Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә һәм унан ситтә йәшәгәндәргә халҡыбыҙҙың мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән танышыуы өсөн шәп мөмкинлек бирә", - тип билдәләне Ирек Ғәлимов.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АБЫНҒАНҒА...

## аяҡ салмайҙар

Ат барҙа бейә сапмаһын, ир барҙа ҡатын алға сыҡмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше ҡайһы саҡта башҡаларға үпкә белдерә? Уның юмор тойғоһон һәм... бәхетһеҙ булыу хоҡуғын шик аҫтына ҡуйғанда.

**(Синклер Льюис).**

Бәхет эҙләүсе кеше өйө барлығын белгән, әммә ул өйҙө таба алмай ҡаңғырған иҫереккә оҡшаш.

**(Вольтер).**

Беҙ бәхет тип атаған нәмә - ул оҙаҡ ваҡыт тыйылып торған ихтыяжды ҡандырыу һөҙөмтәһендә килеп тыуған тойғо ул.

**(Зигмунд Фрейд).**

Үҙенең күңел ихтыяжына тап килгән шарттарҙа йәшәүсе кеше, әлбиттә, бәхетле, әммә үҙ ихтыяжын теләһә ниндәй шарттарға яраҡлаштыра белгәндәр тағы ла бәхетлерәк.

**(Дэвид Юм).**

Кем үҙен бәхетһеҙмен тип атай, ул ысынлап та бәхетһеҙ.

**(Клод Гельвеций).**

Ҡасандыр бәхетле булған урынға яңынан әйләнеп ҡайтма, ул һинең хәтерҙә тере хәтирә булып ҡалһын.

**(Агата Кристи).**

Бөйөк кешеләр үҙ алдына маҡсат ҡуйып, ҡалғандар үҙ теләгенә эйәреп йәшәй.

**(У. Ирвинг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ауылдан ситтә ултырған бәләкәй йортта бер дәрүиш йәшәгән. Халыҡ уны аҡылы һәм үҙенең йәшәү рәүешенә тоғролоғо, нәфсеһе булмауы өсөн хөрмәт иткән. Бына бер саҡ был дәрүиштең йорто янып киткән. Ауыл халҡы утты шәйләп, йүгереп килеп, өй эсендә булған ҡайһы бер әйберҙәрҙе сығара башлаған. Ут һүнмәгәс, беҙрәләп һыу ташып, утҡа һибергә тотонғандар. Әммә ошо мәлдә халыҡты бер нәмә аптырауға һалған: дәрүиш утты һүндерергә ярҙам итеү урынына, ауылдаштары ҡотҡарып алып ҡалған әйберҙәрҙе утҡа ташлай торған.**

**Бына ут һүнгән һәм кешеләр ҙә йылғанан һыу ташыуҙы туҡтатҡан. Шул саҡ көтмәгәндә ҡойоп ямғыр яуып ебәргән. Ошо мәлдә халыҡты тағы ла аптыратып, дәрүиш биҙрә алып, йылғанан һыу ташый, йорто урынында быҫҡып ятҡан утҡа һыу һибә башлаған. Кешеләр нимә уйларға ла белмәй, аптырап баҫып торған-торған да, дәрүиштән нимә булай эшләүен һорағандар.**

**- Мин бар нәмәгә шатланам, - тигән дәрүиш. - Ут барлыҡҡа килә икән, мин шатланам һәм уға янырға ярҙам итәм. Ямғыр яуа икән, мин уға ла шатмын һәм уға ла яуырға ярҙам итәм..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәррирәт: Сәриә ГАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 3400
Заказ - 281/04


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.